✓ *Ғәфү үтенгәндәрҙе лә, бәндәләрҙең гонаһтарын ғәфү итә белгәндәрҙе лә Аллаһ ғәфү итер. Имандың иң яҡшыһы - сабырлыҡ һәм башҡаларҙың да гонаһын ғәфү итә белеү.*

Хәҙистәрҙән.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

5 - 11 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№45 (463)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Милли кейемдәргә...

ихтыяж ҙурая бара

5

Халыҡсанлыҡ көсө...

ҡурайсылар конкурсында нығыраҡ сағылды

7

Имамдың йөрәгендә ихласлыҡ булһа,

Аллаһы Тәғәлә халыҡты мәсеткә килтерәсәк

8-9

Башта иманды күңеленә индер,

шунан иһә яулыҡ ябынырһың...

12-15

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Нимә һуң ул иман? Нисек итеп иманлылыҡ тәрбиәләргә? Дин тотоу шарттарын теүәл үтәү генә әле иманлы булыу тигәнде аңлатамы?

Ғиндулла ШӘЙӘХМӘТОВ, Ғафури районы Сәйетбаба ауылы мәсетенең имам-хатибы, РФ мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы: Иманлы булыу- ул һәр нәмәгә мөнәсәбәттә игелекле булыу. Бөгөн иң мөһиме - белемле генә түгел, ә тәрбиәле, тимәк, иманлы шәхес үҫтереү беренсе урында торорға тейеш. Ә был буш урында теләһә кем тарафынан башҡарыла торған эш түгел. Бының өсөн юғары урындарҙа вазифа биләп ултырыусы етәкселәрҙең дә, мәктәптәрҙә белем һәм тәрбиә биреүсе ябай уҡытыусыларҙың да, ата-әсәләрҙең үҙҙәренең дә өлгөлө булыуы, тимәк, иманлы шәхестәр булыуы төп шарт. Өгөт-нәсихәт менән генә түгел, ә шәхси өлгөң менән дә тәрбиәләйһең иманлылыҡты. Дөрөҫ, элек КПСС идеяларына хеҙмәт итеп, хәҙер дин юлына күсеүем өсөн мине ғәйепләүселәр ҙә булды, тик мин дә яуабын бирә беләм хәҙер, сөнки мин барыбер үҙем булып, асылыма тоғро булып ҡала белдем.Нинәйәт, оҙаҡҡараҡ һуҙылһа ла, дөрөҫ юлыбыҙҙы таптыҡ. Кешелек донъяһының дөрөҫ юлы - Хоҙай Тәғәлә күрһәткән дин юлы. Ә дин юлы ул намаҙ, зәкәт, ураҙа, хаж кеүек ғибәҙәттәр ҡылып йәшәү генә түгел, бәлки, изге ғәмәлдәр, яҡшы эштәр, игелек менән донъя көтөү, ғөмүмән, әҙәм була белеү, тип өйрәтә изге китап. Аллаһ рәхмәте менән бирелгән был иман ташҡа барып ҡағылһа, йән өрөп, ташты ла тупраҡ кеүек, хатта унан да йомшағыраҡ бер нәмәгә әйләндерә ала. Киреһенсә, имандан алыҫлаша барған йәндәрҙең һәм күңелдәрҙең ташҡа әйләнеп ҡатып ҡалыуы бар. Иманлы булыу - ул һәр беребеҙҙең донъя көтөүҙәге тырышлығы, үҙен уратып алған донъяға һәм кешеләргә ҡарата изгелекле мөнәсәбәте, йәмәғәтселектә ҡаҙанған лайыҡлы абруйы, тыуған илен, халҡын һөйә белеүе, һәр ваҡыт улар мәнфәғәтен яҡлау өсөн әҙер булыуы.

Әлфиә ЙОМАҒУЖИНА, Баймаҡ районы Ғумәр ауылының башланғыс класс уҡытыусыһы: Иман бөтә кешегә лә тыумыштан бирелгән була, ләкин шул уҡ ваҡытта иман бер кемгә лә көсләп тағылмай. Бәндәләргә һайлау хоҡуғы ла бирелә: кем ниндәй юлдан китә - Аллаһы Тәғәлә тарафынан булмышына һалынған иманына тоғро ҡаламы ул, әллә булмаһа донъяның алдатҡыс һәм ҡыҙыҡтырғыс ялғандары йоғонтоһона бирелеп, иманынан яҙамы... Аллаға шөкөр, иманлы ғаиләлә, өләсәйем, әсәйем һабаҡтарын күңелемә һеңдереп үҫтем. Хәҙер үҙем әсәй. Шөкөр, ғаиләм менән ҡәнәғәтмен. Беҙҙә эскән, аҙып-туҙып йөрөгән кеше юҡ. Ете йыл инде хәҙер яулыҡлымын. Иманлылыҡ - ул бик ҙур, киң төшөнсә. Аңлаған кешегә иманлылыҡ - ул намыҫы ҡушҡанса йәшәү рәүеше. Ул аҡылға бәрәбәр төшөнсә тип тә әйтер инем. Кешенең бит аҡылы бар икән - ул бар, юҡ икән - юҡ инде...

Бала тәрбиәләгәндә ололарҙың кәңәштәрен тыңлау, уларҙың тәжрибәһенә таяныу, халыҡ педагогикаһының алтын аҡылын иҫтә тотоу, ҡулланыу беҙгә, йәштәргә, бик ныҡ ярҙам итә, бәләҡазаларҙан һаҡлай. Бала саҡта әсәйҙәрҙән ишетеп үҫкән кинәйәле әйтемдәр, тыйыуҙар, өйрәтеүҙәрҙе тормошта һәр аҙымда ҡулланырға тырышабыҙ. Шөкөр, тамырҙар өҙөлмәгән, рухи күсәгилешлек бар, тип шатланам.

(Дауамы 2-се биттә).

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

АЛЛАҺЫ РИЗАЛЫҒЫ ӨСӨН...

ҡорбандар салынһын

Ҡорбан ғәйете динебеҙҙә Рамаҙан байрамы кеүек үк, иң ҙур байрамдарҙың береһе булып тора. Ул һәр йылда Зөлхизә айының 10-сы көнөндә башланып, 3-4 көн дауам итә. Ҡорбан салыу йолаһы бөтә диндәрҙә лә тиерлек бар, сөнки ул кешелек тарихының башланғыс осорҙарына барып тоташа.

Ҡөрьән-Кәримдә Әҙәм бәйғәмбәрҙең (ғәләйһи сәлләм) улдары Һабил менән Ҡабилдың ҡорбан салыуҙары тураһында былай тип яҙыла: "Әҙәмдең улдары хаҡындағы хәбәрҙе хаҡлыҡ менән уҡы. Аллаһ икеһенә лә ҡорбан салырға бойорҙо. Һабилдең ҡорбаны ҡабул булды, Ҡабилдеке ҡабул булманы" ("Мәидә", 27). Был аят Аллаһҡа яҡынлашыу маҡсаты менән ҡорбан салыу йолаһының кешелек донъяһы яралтылыу менән барлыҡҡа килеүен асыҡ күрһәтә.

Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йәшәгән дәүерҙә ҡорбан салыу вазифаһы "Раббың ризалығы өсөн намаҙ уҡы һәм етемдәрҙе үә фәҡирҙәрҙе ашатыр өсөн ҡорбан сал!" ("Кәүсәр", 2) аяты менән өммәткә белдерелгән. Шунан башлап был йола бөгөнгәсә дауам итә. "Ҡорбан - атағыҙ Ибраһимдың сөннәтелер", тигән Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм шәхсән үҙе ҡорбан салыу үрнәген күрһәтеп, өммәтенә был мәсьәләлә остаз булған.

(Дауамы 2-се биттә).

✓ *Ҡорбан итеп салынырға тейешле хайуан сәләмәт һәм уртаса көрләктә булырға тейеш. Бер хәҙистә былай тиелә: "Ҡорбанға эрерәк хайуанды һуйығыҙ. Һис шикһеҙ, уларға атланып сират күперенән сығырһығыҙ".*

ӘЙҘӘ, АҠСА ӘШЛӘЙЕК!

ЯЛҠАУЛЫҠҠА БАШ БУЛҺАҢ...

Әбйәлил районының Магнитогорск кеүек ҙур ҡалаға яҡын булыуы уңған хужабикәләргә шәхси хужалыҡтарында мул итеп үҫтергән ауыл хужалығы тауарҙарының ғаиләнән артҡанын баҙар-йәрминкәләргә сығарып һатыуға булышлыҡ итә. Ошондай уңған апайҙарҙан тауарҙарын баҙарҙа ниндәй хаҡҡа ҡуйыуҙарын һәм уларҙың үтемлеген һораштым.

Һөт-ҡаймаҡ, эремсек-ҡорот етәрлек күләмдә тупланһа, шунда уҡ ҡалаға юл тотабыҙ, ти апайҙар. Баҙарҙа һөттөң 1,5 литрын 40 һумға, эремсектең килограмын 60-70 һумға, майҙың бер килограмын 180-200 һумға, ә әбей-бабайҙарға иһә хаҡты йыш ҡына төшөрөп тә һаталар икән. Баҙарҙа тағы ла бер үтемле тауар - ул ҡорот. Шыйыҡ көйө 1,5 литрлы һауыттарға тултырылып, 70 һумға тәҡдим ителгән ҡоротто һатып алырға теләүселәр күп булыуын билдәләй улар.

Көҙгө уңыштың бер бөртөгөн дә әрәм итергә күнекмәгән ауыл халҡы ҡалала йәшәүселәрҙе йәшелсә-емеш менән дә ҡыуандыра. Ҙур баҡсаларҙы тултырып сәскән картуф, кишерсөгөлдөр һәм башҡа төр йәшелсә-емештәрҙе һатып алырға теләүселәр бихисап, сөнки ҡала халҡы үҙ һаулығын ҡайғыртып, экологик яҡтан таҙа урында үҫкән, ағыулы химикаттар менән зарарланмаған йәшелсәне һатып алыуҙы хуп күрә. Шулай уҡ апайҙар йәшелсәләрен бары тик көҙөн генә һатып ҡалмай, ә төрлөсә әҙерләп, ҡышын да һатыуға сығара. Мәҫәлән, уларҙың берәһе быйыл емерелеп уңған кишерҙе ҡырғыс аша үткәреп, 0,5 килограмлап туңдырып әҙерләп ҡуйып, ҡышын һатыуға сығарасаҡмын, ти. Баҙар шарттарын күптән үҙләштергән апайҙың был эше лә уңышлы тамамланырына шик юҡ, сөнки ул ҡайһы миҙгелдә нимә һәм нисек үтеүен яҡшы белеп эш итә.

Шулай уҡ уңған хужабикәләрҙең тағы ла бер уңышлы ғына "бизнес-проекты" - буҙа әҙерләп һатыуға сығарыу. Буҙа әҙерләү ысулы бер төрлө булһа ла, ул һәр кемдең үҙенә генә хас нескәлектәре һәм айырмалары менән килеп сыға. Кемдер буҙа әҙер булып килгәндә яңы ғына айыртылған ҡаймаҡ та ҡушып ебәреп, эсемлекте тағы ла тәмлерәк итә икән. Шулай уҡ буҙаны әҙерләү ваҡыты ла төрлөһөнөң төрлөсә. Әҙер буҙаның 1,5 литры баҙарҙа 70 һум менән һатыла, ә бер барғанда кәмендә 7-8 һауыт алып барылыуын иҫәпкә алғанда, килемдең арыу ғына булыуын төҫмөрләргә була.

Ялҡаулыҡҡа баш булып, еребеҙҙең уңдырышлығын дөрөҫ файҙалана белгәндә, мул, етеш һәм матур тормош көтөүе бер ни тормай, ти уңған хужабикәләр.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Нимә һуң ул иман? Нисек итеп иманлылыҡ тәрбиәләргә? Дин тотоу шарттарын теүәл үтәү генә әле иманлы булыу тигәнде аңлатамы?

(Башы 1-се биттә).

Әлфиә АҘЫЛБАЕВА, журналист: Кешелә әҙәп-әхлаҡ нормаларын тәрбиәләп булалыр ҙа, ә бына иманды тәрбиәләү мөмкинме икән? Иман бит ул тыуғанға тиклем үк кеше күңеленә һалынған була. Яңы ғына донъяға килгән сабыйға ҡарап та, был баланың йөҙөндә иман нуры бар, тиҙәр. Бәләкәй саҡтарҙа уҡ беҙ аңлай торғайныҡ: "Иманһыҙ!" - тип әйтеү өлкәндәрҙең иң насар орошоу һүҙе иҫәпләнә ине. Яңылыш ҡылыш ҡылмаҡ ҡаҙағы ҡаҙаҡ ҡаҙаҡ ҡаҙаҡ

АҘНА ШАҢДАУЫ

Был ваҡиға тураһында ишеткәнһегеҙҙер: ике аҙна элек М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетында студент йәштәр менән осрашҡан мәлдә Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевҡа Башҡортостан егете - Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университетының икенсе курс студенты Наил Ниғмәтуллин үҙ һорауы менән мөрәжәғәт иткәйне. Уның төп һорауы былайыраҡ яңғыраны: "Быға тиклем Башҡортостан иң тыныс төбәк һаналды, төрлө милләт вәкилдәре һәр ваҡыт татыулыҡта йәшәне. Хәҙер ҡайҙандыр күпләп террористик төркөмдөр "барлыҡҡа килде". Яңыраҡ милләт-ара ыҙғыш тыуҙырыусы провокацион сайттар ҡабаттан эшләй башланы..."

Наилдың был сығышын төрлөсә ҡабул иттеләр. Фекерҙәр ниндәй генә булмаһын, йәш кеше тыуған республикаһы өсөн борсолоуын, үҙенең гражданлыҡ позицияһын белдерҙе - уны бының өсөн һис ғәйепләп булмай. Уны борсоған экстремистик күренештәр тураһындағы хәбәрҙәр һуңғы осорҙа республикала, ысынлап та, йыш телгә алына. Бармы һуң беҙҙә экстремизм? Әллә кемдәрҙер уны юрый ҡуйырта ғынамы? Наилға яуап итеп ил Президенты: "Башҡортостандың ҡайһы бер төбәктәрендә экстремистик структуралар күбәйеүе хаҡында беләм, был турала Именлек хеҙмәте лә, хоҡуҡ һаҡлау органдары ла хәбәр итә", - тип белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта бөгөнгө көнгә тиклем республикала экстремистик структуралар барлығы тураһында дәлилдәр халыҡ иғтибарына тәҡдим ителгәне юҡ. Наил да был осраҡта күптәрҙең күңелендә йөрөгән "Ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң беҙҙә ул террорсылар төркөмдәре тураһындағы хәбәрҙәр?" тигән борсолоуҙы, аптыраныуҙы ғына еткерҙе. Тик уны аңлап етмәнеләр шикелле...

Ошо арыу ғына шау-шыу тыуҙырған осрашыуҙан һуң Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов йәш яҡташыбыҙ менән осрашып һөйләшергә теләүен белдергәйне. Президенттың әле яңыраҡ Мәскәүҙә Башҡортостан студенттары менән осрашыуына Наил Ниғмәтуллин да саҡырылды. Осрашыу тураһында "Йәшлек" гәзите хәбәрсеһенең мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ.

ТӘҮГЕ УРЫНДА - ИҚТИСАД МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

Яҡташ студенттар менән һөйләшеүҙең төп темаһы шулай билдәләнде

Был ваҡиғаны күптәр ҡыҙыҡһынып көттө: берәүҙәр, ух, хәҙер бутҡа бешерәсәктәр, тип ниндәйҙер сенсацияға өмөт итте, икенселәр, ил башлығына республикалағы хәл буйынса һорау бирергә батырсылыҡ иткән студенттың кәрәген бирерҙәр инде, тип башҡорт егете өсөн борсолдо... Нисек кенә булмаһын, Башҡортостан Республикаһының Мәскәү ҡалаһындағы вәкиллегендә осрашыу ойошторолдо, тик ниндәйҙер сәбәп менән Наил Ниғмәтуллин унда килмәне. Хәйер, етди сараларҙан - Башҡортостан менән РОСНАНО, Башҡортостан менән "Транснефть" компанияһы араһындағы хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүҙәргә ҡул ҡуйғандан һуң студенттар менән осрашыуға килгән Рөстәм Хәмитов студенттың булмауынан трагедия ла, фарс та яһаманы. Үҙенең әйтеүе буйынса, йәштәр менән осрашыуҙы ул күптән планлаштырған булған:

- Рәсәй Федерацияһы Президенты менән студенттарҙың һөйләшеүе хаҡындағы телевизорҙан күрһәтелгән сюжет осрашыуҙы оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа этәрҙе - көтмәгәндә Башҡортостан Республикаһындағы хәлдәр тураһында бәхәс ҡупты. Коллегаларым һеҙҙе ошо турала һөйләшергә, фекер алышырға саҡырҙы ла инде. Ләкин бәхәсте башлап ебәреүсе Наил Ниғмәтуллин үҙе бында булмағас, был теманы күтәреп тормайбыҙ. Шулай ҙа уның менән осрашырбыҙ әле, тим. Башҡортостан Республикаһы Президенты саҡырғанда, һөйләшергә тема булғанда, уның килеүе һәм күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеү дөрөҫ булыр ине, тип иҫәпләйем...

Уның ҡарауы, Президент менән осрашыуға иң беренсе Снежана Сәйфуллина килеп етте. Тап ошо ҡыҙ Медведев менән осрашыу ваҡытында Наилдең сығышынан һуң урынынан һикереп килеп тороп, мин Мәскәүҙә, бөйөк Ватаныбыҙ йөрәгендә йәшәйем, ләкин минең бөтә туғандарым Башҡортостанда, тип ерле юҡтан утҡа май һипкәйне: "Мин унда йыш булам, һәм элек туған-тыумасаларым, ысынлап та, элекке етәкселеккә зарлана торғайны. Хәҙер, яңы Президент килгәс, белеүемсә, ул "Берҙәм Рәсәй"ҙә, барыһы ла үҙгәргәндәй кеүек, һәр хәлдә, ундай проблемалар юҡ. Рустарҙың, татарҙарҙың һәм БДУ-ға уҡырға инергә теләүселәрҙең проблемалары юҡ. Сөнки элек кемдең фамилияһы "-лина"ға (Хөснуллина, Сәйфуллина) бөтә, уларҙы уҡырға алманылар, рус фамилиялылар тураһында әйтеп тә тормайым. Ысын, шулай була торғайны, әммә яңы Президент килеү менән был мәсьәлә хәл ителде, һеҙгә шуның өсөн рәхмәт" (һүҙмә-һүҙ бирелде - авт.). Йәш кенә булһа ла, түрәләргә ярарға ҡайҙа өйрәнгәндер был бала - әллә Нижневартовскиҙа йәшәгәнендә, әллә Рәсәй Фәндәр академияһы ҡарамағындағы Гуманитар фәндәр дәүләт академия университетында уҡығанындамы - бер Хоҙайға билдәле. Әммә шул осрашыуҙа ла бик оҫта ғына итеп етәкселәрҙе майлап ебәрергә форсатын тапты. Уның, әйткәндәй, БДУ тураһындағы хәбәренең шыр ялған икәнен аңлы кешеләргә аңлатып тороу кәрәкмәй. Гөмүмән, уйламай һөйләгән ҡыҙҙың бөтә хәбәре, республикала беҙҙе ҡыҫырыҡлайҙар, кәмһетәләр, тип үҙҙәренең абруйын үҙҙәре төшөрөп, бахыр булып йөрөгән ҡайһы бер әҙәмдәрҙең хәбәре. Ярай ҙа ундайҙар аҙ, шөкөр, күпселекте аңлы кешеләр тәшкил итә һәм, милләт-ара мәсьәләләрҙе ҡуйыртып, донъя бутап йөрөүселәрҙең шауҡымына бирелмәй, гөрләтеп йәшәүен дауам итә. Рөстәм Хәмитов та, республика өсөн бөгөнгө көн үҙәгендә милләт-ара мөнәсәбәттәр түгел, ә иҡтисад беренсе урында торорға тейеш, башҡа бөтә нәмә лә, айырыуса ныҡ күпертелгән, гипертрофияланған хәлдә, беҙҙе артҡа тарта, тине:

- Республикабыҙ - күп милләтле. 400-500 йыл элек бында рустар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар килеп ултырған. Этностар нығынып, ошо ергә тамыр ебәргән. Толерантлыҡ өлгөһөн күрһәткән башҡорт халҡына рәхмәт - бында милләт нигеҙендә низағтар булмаған, проблемалар ҡалҡмаған, һуғыштар ҡабынмаған. Шуға ла был мәсьәләләә тотороклолоҡ бар. Тотороклолоҡ властарҙың аҡыллы етәкселеге арҡаһында, тигәнде күп тапҡыр ишеттем. Был хата ҡараш. Тотороклолоҡ, татыулыҡ республика территорияһында йәшәүсе халыҡтарҙың үҙенә бәйле. Ә етәкселәрҙең, күрәләтә бер халыҡтың икенсеһенән өҫтөнлөгөн иғлан иткән милли көстәргә таянып, хәлде киҫкенләштереп кенә ебәреүе мөмкин. Кешеләрҙе лә яһалма рәүештә туплап булмай. Сөнки кешеләр үҙҙәре генә берләшә ала. Был химиялағы йәки физикалағы атомдарҙың, молекулаларҙың бер-береһенә тартылышы кеүек. Һәм бөгөн, республикалағы милли мөнәсәбәттәр тураһында һөйләгәндә ысын күңелдән, беҙҙә был йәһәттән хәл тыныс, тоторокло, тип әйтә алабыҙ.

Президент, кешеләрҙе эш урыны, лайыҡлы эш хаҡы менән тәьмин итеү, социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү Башҡортостан өсөн иң мөһиме, тип, быны бер кеше яңғыҙы башҡарып сыға алмай, тик бергәләп генә хәл итергә мөмкин тигән фекерҙе һыҙыҡ өҫтөнә алды:

- Иҡтисад мәсьәләләренә әйләнеп ҡайтҡанда иһә, оҙаҡ йылдар буйына беҙ нефтебеҙ бар, шуға ла иҡтисади йәһәттән проблемалар ҙа булмаясаҡ, тигән фекергә таянып йәшәнек. Ләкин нефткә, нефтте эшкәртеүгә генә йүнәлтелгән моноиҡтисад үҫеш генераторы була алмай. Ундай иҡтисад аҡыллы, заманса фекерләгән белгестәрҙе талап итмәй, бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа үҫергә ирек бирмәй, инициативаны үлтерә. Бөгөн инновацион иҡтисад кәрәк. Беҙ инновацион илдәр иҫәбенә инмәйбеҙ, үҫешкән илдәрҙән ныҡ артта ҡалғанбыҙ. Идеология менән шөғөлләнеп, тарихыбыҙ менән ғорурланып, киләсәккә ҡарамағанбыҙ. Эш хаҡтары шундай түбән, хатта был турала әйтеүе лә оят. Йәштәр өсөн эш урындары юҡ. Һеҙ, йәш белгестәр, Башҡортостанға ҡайтырһығыҙ, ә мин һеҙгә юғары эш хаҡы түләнгән, заманса, перспективалы эш урыны вәғәҙә итә алмайым...

...Республикабыҙҙың һәр йәһәттән иң алдынғы төбәктәрҙең береһе булыуын теләйем. Шуға ла һеҙ, уҡып бөткәс, үҙебеҙҙең төбәккә ҡайтырһығыҙ, өс-дүрт йылдан заманса предприятиелар эшләй башлар, тип ышанам. Еңел булмаясаҡ, киреһенсә, ауыр булыр. Ләкин шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер оло эштең башында тороу үҙе үҡ ҡыҙыҡлы.

Президентты иғтибар менән тыңлаған йәштәр осрашыу ваҡытында тәҡдимдәр менән сығыш яһаны, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап эҙләне. Мәҫәлән, Юғары иҡтисад мәктәбе студенты Данил Дәүләтов туризмды үҫтереү перспективалары тураһында һораһа, Гүзәл Хәмиҙуллина республиканың биш төр ярыш буйынса йыйылма командаһына ярҙам талап ителеүен билдәләне. Буласаҡ журналист Флорида Миһранова Президенттың матбуғат хеҙмәтендә практика үтеү мөмкинлеген белеште, ә мәҙәниәт академияһында белем алған Гүзәлиә Рыҫколова мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең түбән эш хаҡына эшләүҙәрен телгә алды. Мәскәү тау университеты студенты Ильяс Яҡупов, Саха-Якутияла студенттарға ярҙам юғары кимәлдә ойошторолған, тине: "Яҡут студенттарының уртаса стипендиялары 4500 һум (беҙҙә 1600 һум), ятаҡ өсөн дә түләйҙәр, ҡайтып кире килер өсөн йылына бер тапҡыр юлға аҡса бүләләр, йыл һайын яҡшы уҡыған йөҙ студент сит илдәрҙә стажировка үтә... Унда ошо мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса тотош министрлыҡ бар, бәлки, беҙҙекеләр шунда барып, уларҙың тәжрибәһе менән уртаҡлашыр?"

Сәғәт ярымға һуҙылған ихлас һөйләшеүҙән ике яҡ та ҡәнәғәт ҡалды, буғай, һәр хәлдә, самолетҡа ашыҡҡан етәксе юл ыңғайында ла студенттар менән аралашыуын дауам итте. Яҡын арала йәштәр менән тағы ла осрашыу, тик уны ҙурыраҡ залда күберәк кешене йәлеп итеп ойоштороу кәрәк, тине Мәскәүҙә белем алыусы Башҡортостан студенттары менән хушлашҡанда Рөстәм Хәмитов.

Баныу ҠАҺАРМАНОВА.
"Йәшлек" гәзитенән.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Өфө ҡалаһында 2013 йылғы VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарына әҙерлек һәм уны үткәреү тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары Башҡортостандың баш ҡалаһында 2013 йылдың февраль-мартында үтәсәк. Белешмә өсөн. Халыҡ-ара балалар уйындары Халыҡ-ара Олимпия комитеты ярҙамында 1968 йылдан башлап үткәрелә. Ғәҙәттә, унда 12-15 йәштәрҙәге балалар ҡатнаша. Уйындар ойоштороғандан алып унда 37 мең йәш спортсы ҡатнашҡан. Өфөгә ярыштарға донъяның төрлө илдәренән меңгә яҡын уҡыусының килеүе көтөлә.

✓Эксперттар мәғлүмәте буйынса, Башҡортостан иген етештереү буйынса Рәсәйҙең иң эре төбәктәренең береһе булып тора. Бөгөнгө көнгә республиканан ситтә яҡынса 10 мең тонна яңы уңыш игене һатылған. Ноябрҙә был һандың 20 мең тоннаға етеүе ихтимал. Яңы йыл алдынан Башҡортостан игенен Бангладешҡа поставкалау планлаштырыла. Был ил йыл һайын беҙҙән 300 мең тоннаға тиклем иген һатып алмаҡсы. Шундай уҡ һөйләшеүҙәр башҡа импортерҙар менән алып барыла.

✓БР Хөкүмәте Йортонда Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт республика йәштәр премияларын тапшырыу тантанаһы үтте. Лауреаттарҙы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов ҡотланы.Быйыл Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт республика йәштәр премияларына дәғүә итеүгә Башҡортостандың төрлө ҡалалары һәм райондарынан 55 эш тәҡдим ителгән. Шуларҙан премияға Башҡорт дәүләт аграр университетынан Ләлә Дәүләтбаева, Өфө күҙ ауырыуҙары фәнни-тикшеренеү институтынан Наил Баймөхәмәтов, Гузәл Бикбова, Артур Хәбибуллиндар лайыҡ булды.

✓Ағымдағы аҙна Башҡортостанда болотло буласаҡ. Аяҙлы-болотло көндәр тороуы, урыны менән бер аҙ ямғыр яуыуы көтөлә. Гидрометеорология мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала төнөн - 3 градусҡа, көндөҙ 5 градусҡа тиклем йылы буласаҡ. Синоптиктар шәмбенән, 5 ноябрҙән башлап, төбәктә кинәт һыуытыуын күҙаллай. Төндә 10-13 градусҡаса, көндөҙ 10 градусҡаса һыуытыуы ихтимал.

✓ *Иң ҡыйбат торлаҡ Өфөнөң үҙәк урамдарында. Мәҫәлән, Ленин һәм К. Маркс урамдарында торлаҡтың бер квадрат метры 60 меңгә барып етә. Шаҡшала фатирҙар ике тапҡырға осһоҙораҡ: бер квадраты яҡынса 31 мең һум.*

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

ҺАЛЫМ ТҮЛӘМӘГӘН БУЛҺАҢ ДА...

Был яңылыҡ Рәсәйҙең һәр дүртенсе кешеһен ҡыуандырасаҡ, моғайын, тип фараз ителә. Сөнки, Федераль һалым хеҙмәте (ФНС) иҫәпләүенсә, 36 миллион ватандашыбыҙҙың һалым бурысы барлығы асыҡланған. Киләһе йылдан ФНС ошо бурысҡа ҡарата амнистия иғлан итә. Был хаҡта әлеге хеҙмәт етәксеһе Михаил Мишустик белдерҙе.

- Бында түләтеп булмай торған йәки яңылыш һалынған һалымдар хаҡында ғына һүҙ бара, - тип асыҡлыҡ индерҙе һалым хеҙмәте башлығы "устарын ышҡып" ҡыуана ғына башлаған бәгзе бер яман уйлы һалым түләмәүселәргә төбәп. - Эштәре суд приставтарына тапшырылған бурыслылар һалымдарын түләргә тейеш.

Һалымсылар барлығы 33 миллиард һумлыҡ бурысты иҫәптән сығарасаҡ. Шуның яртыһынан күберәге - транспорт һалымы буйынса, ә ҡалғаны ер һәм милекселек һалымы буйынса бурыстар.

Һалым хеҙмәтенең бындай аҙымға барыуы кешелек хаҡында эскерһеҙ хәстәрлек күреүҙән түгел, әлбиттә. Бурысты иҫәптән сығарыу һалым системаһын бер ниндәй һөҙөмтә бирмәгән, ҡатып ҡалған файҙаһыҙ эштәрҙән азат итеүгә бәйле. Тиҫтәләрсә миллиард сумма тиҫтәләрсә йылдар буйы йыйылып килгән. Ә нисек һәр икенсе рәсәйле бурыслы булып сыға, тип һорарһығыҙ. Төп сәбәп - мәғлүмәттәр тапшырғанда ебәрелгән хаталар. Уларҙы төҙәтеү өсөн меңәрләгән, миллионланған кеше суд юлын тапарға тейеш була. Ә хәҙер бөтәһе лә бер юлы һыҙылып ташланасаҡ. Закон проекты буйынса РФ Финанс министрлығында килешеүгә өлгәшелгән, ул 2012 йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инәсәк, тип көтөлә. Әйткәндәй, һалымсылар хәҙер шундай "аҡыл" алды: киләсәктә граждандарҙың дәүләт алдындағы бурысы 1500 һумдан артыҡ булған хәлдә генә судҡа биреү мәсьәләһен ҡуҙғатырға. Тәжрибәнән күренеүенсә, бәләкәй бурыстарҙы түләтеү бюджетҡа кирекенсә, ҙурыраҡ сығымдар ғына килтерә.

... КРЕДИТЫНДЫ АЛДАН ТҮЛӘ!

1 ноябрҙән Гражданлыҡ кодексына кредиттарҙы ваҡытынан алда түләүгә ҡағылышлы төҙәтмәләр көсөнә инә. Үткән аҙнала был Законға ил Президенты ҡул ҡуйҙы, ә бынан алдараҡ ул Дәүләт Думаһы һәм Федерация Советында хупланғайны.

Дәрөҫөн әйткәндә, әлеге ваҡытта ла кредит аҡсаһын ваҡытынан алда түләргә була, тик банк менән килешеү нигеҙендә. Ә кредит ойошмалары, кирекенсә, быны өнәмәй, һәр төрлө һылтау табып, талаптар ҡуйырға ғәҙәтләнгән. Мәҫәлән, килешеүҙә ваҡытынан алда түләүҙе рөхсәт итмәүсе срок билдәләнә, айлыҡ түләүҙәрҙең иң аҙ күләме күрһәтелә, штраф билдәләнә һ.б. Әле ҡабул ителгән төҙәтмәләр ошондай һәр төрлө сикләүҙәргә сик ҡуя ла инде. Заемсы банкты был турала 30 көн алдан хәбәрҙар ҡуйып, кредитты өлөшләтә йәки тулыһынса түләп ҡуйырға хаҡлы. Был айырым кешеләр тарафынан алынған бөтә төр кредиттарға ла ҡағыла. Ә проценттар аҡсаны файҙаланған өсөн генә иҫәпләнергә тейеш. Яңы ҡағиҙәләр киләсәктә кредит аласаҡ кешеләргә лә, элек алғандар мәнфәғәтенә лә берҙәй ҡ ҡағыла.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ҠАЙҘА ФАТИР АРЗАНЫРАҠ?

"Комсомольская правда" гәзитенең сайтында ҙуғарылған һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, өфөләләрҙең өстән бер өлөшө ҡаланан ситтә йәшәргә теләй, ә һәр бишенсе кеше ҡала ҙәгендәге фатир тураһында хыяллана.

Популярлығы буйынса исемлектең өсөнсө урынында - "Йәшел сауҡалыҡ" районы. Яуап биреүселәрҙең 17 проценты тап "Йәшел сауҡалыҡ"та фатир һатып алырға теләүен белдергән. Респонденттарҙың 3 проценты - Инорста, шул самаһы уҡ Дим районында йәшәргә теләр ине. Затон һәм Шаҡша биҫтәләре берәр процент тауыш йыйған.

"Эксперт" күсемһеҙ милек агентлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, ҡалала һатылған һәр бишенсе фатир Октябрь проспектында урынлашҡан. Һатыуға ҡуйылған фатирҙарҙың 18 проценты ҡаланың ҙәгенә, тағы ла шул уҡ самаһы "Йәшел сауҡалыҡ"ҡа тура килә. Черниковкалағы фатирҙарын кешеләр һирәгерәк ҡата - 16 процент. Шаҡша һәм Затонда йәшәүселәр араһында фатирҙарын һатырға теләүселәр тағы ла аҙыраҡ.

Октябрь проспектында йышыраҡ бер һәм ике бүлмәле фатирҙар һатыуға ҡуйыла, өс бүлмәле фатирҙы "Йәшел сауҡалыҡ"тан һатып алырға була, ә күп бүлмәле фатирҙар ҡаланың ҙәгендә тәҡдим ителә.

Ошо уҡ агентлыҡ мәғлүмәттәре буйынса, иң ҡыйбат торлаҡ Өфөнөң ҙәк урамдарында. Мәҫәлән, Ленин һәм К. Маркс урамдарында торлаҡтың бер квадрат метры 60 меңгә барып етә. Шаҡшала фатирҙар ике тапҡырға осһоҙораҡ: бер квадраты яҡынса 31 мең һум.

КӨРӘШТЕҢ БЕР ТӨРӨ БЫЛ

Быйылғы уҡыу йылында Өфөнөң 18 мең мәктәп уҡыусыһының наркотиктар ҡулланыу-ҡулланмауын тикшерәсәктәр.

1-се Республика наркология диспансеры баш табибы урынбаҫары Лилиә Михайлова белдереүенсә, Башҡортостанда балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең 1,5 проценты психик әүҙемлеккә килтереүсе матдә ҡуллана. Дүрт йыл рәттән 15 йәштән өлкәнерәк үҫмерҙәрҙең организмдарында наркотик матдәләр булыу-булмауына тест һынауҙары үткәрелә. Бындай тикшереүҙәр илдең бер нисә төбәгендә генә тормошҡа ашырыла, шуға ла федераль закон менән яйға һалынмаған. Был үҙенә күрә ҡайһы бер ауырлыҡтар ҙа тыуҙыра. Мәҫәлән, тест үткәреү өсөн сығымдарҙы ҡала һәм райондарҙың хакимиәттәренә ҡапларға тура килә.

Былтыр республика буйынса 33 мең үҫмер тикшерелгән, уларҙың 20 меңгә яҡыны Өфөлә йәшәй. Быйыл тесты баш ҡалала 18 мең өлкән класс уҡыусыһы үтәсәк. Шулай ҙа уларҙың аныҡ иҫәбен алдан әйтеүе ауыр, ти белгестәр, сөнки был процедураларға үҫмер үҙе теләп килергә тейеш.

Тест организмдағы өс төрлө наркотикты: опиум, марихуана, амфетаминдарҙы асыҡларға мөмкинлек бирә. Процедурала мотлаҡ ҡатнашыусы табип-нарколог тест кире һөҙөмтә күрһәткәндә лә үҫмерҙең наркотик ҡабул итеүен билдәләй ала.

Әйткәндәй, элекке йылдарҙа тест үткәреү тураһында алдан хәбәр ителһә, былтырғы йылдан ул турала бер тәүлек алдан билдәле була. Был ваҡыт эсендә үҫмер организмын наркотиктарҙан таҙартып өлгөрә алмай. Әгәр ҙә тест һөҙөмтәһендә баланың наркотик ҡулланыуы асыҡланһа, уға медицина ярҙамы тәҡдим ителә. Был ярҙамды ҡабул итергәме, юҡмы, уның ата-әсәһе хәл итә.

БАШҠОРТ МОҢО - ТӨРКИӘЛӘ

Төркиәлә ошо көндәрҙә булып үткән сәнғәт һәм мәҙәниәт көндәре билдәле ҡаҙаҡ композиторы, музыканты Динә Нурпеисованың тыуыуына 150 йыл тулыуға арналғайны. Сара Төрксой Халыҡ-ара ойошмаһы тарафынан ойоштороолдо. Башҡортостандан тыш унда Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Дағстан, Ҡабарҙы-Балҡар, Татарстандан милли һәм фольклор коллективтары ҡатнашты.

Был сарала Сибайҙан билдәле сәсәниә Асия Ғәйнуллина етәкселегендәге "Арҡайым" фольклор ансамбле төрөк тамашасыларын башҡорт көй-моңо менән таныштырҙы. Боронғо музыка ҡоралдарына ҡушылып башҡарылған халыҡ йырҙарын сит илдә яратып ҡабул иттеләр. Концерт барышында сибайҙар шулай уҡ милли кейемдәр күргәҙмәһе лә ойоштороо.

Шулай уҡ Хәйбулла районының БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Илдар Юнысов етәкселегендәге "Түңгәүер" ҡурайсылар халыҡ ансамбле сығыш яһаны. Башҡорт мәҙәниәтен, фольклорын, тарихын өйрәнгән ғалимдар, Төркиәләге милләттәштәр менән осрашыуҙар үткәрелде. Шулай итеп, башҡорт мәҙәниәтен донъяға танытыуға йәнә бер аҙым яһалды.

Әхәт СӘЛИХОВ.

ЛЕНИНДЫ ҠАЙТАРҘЫЛАР

Утыҙ йыл элек Санкт-Петербургҡа реставрацияға ебәрелгән Ленин һәйкәле, реставрацияланып, Өфөгә ҡайтарыуҙың маҡсатҡа ярашлы булыу-булмауына бәйле ҡыҙыу бәхәстәрҙән һуң, Өфөнөң Ленин һәм Коммунистик урамдары киҫелешендәге скверҙа яңынан үҙ урынын алды.

В.И.Ленинға һәйкәл Башҡортостандың баш ҡалаһында 1924 йылда Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып ҡуйыла. Үткән быуаттың 80-сы йылдарында гипстан эшләнгән һәйкәл емерелә башлай һәм Өфөнөң ҡала коммуналь хужалығы заказы буйынса Ленинград оҫталары яһалма мәрмәрҙән уның күсермәһен эшләй. 1987 йылда заказ үтәлә, әммә уның өсөн түләнмәй һәм һәйкәл Ленинградта ҡала. Бер йыл элек Рәсәй сәнғәт академияһы фондтарында уны скульптор Руслан Арыҫланбаев таба.

Ҡала халҡы һәйкәлде тарихи урынына ҡайтарыуҙы һорап күп тапҡырҙар сығыш яһаны. Ошоға бәйле ҙур бәхәстәр йәйелдерелде, унда сәйәси партиялар һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре лә ҡатнашты. Бәхәстәрҙә ҡатнашыусыларҙың күбеһе һәйкәлде ҡайтарыуҙы яҡлап сыҡты. Реставрация эштәре һәм һәйкәлде ҡалаға ҡайтарыу өсөн Өфө эшҡыуарҙарының береһе түләй. Ысынында, был һәйкәл торған Ленин скверы элек бик күп өфөләләрҙең, ҡунаҡтарҙың яратҡан ял итеү урыны ине. Иҫтәлеккә фотолар ҙа ошо урында төшөрөлә ине. Бөгөн өлкән быуындың һәр береһенең фотоальбомында, моғайын да, ошо урында төшкән фото һаҡланалыр. Лениндың һәйкәлен ҡабат үҙ урынына ҡайтарыу идеяһын яҡлаусыларҙың күбеһе өсөн, әлбиттә, бына ошо иҫтәлек ҡәҙерле. Һәйкәл ҡуйыла икән, тимәк, был урын төҙөкләндереләсәк, ял итерлек тағы бер урын артасаҡ.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфөлә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында "Евро-Өфө-Азия" форумы булып үтте. Форумда 30 кеше ҡатнашты. Уларҙың күпселеге - ателье хеҙмәткәрҙәре йәки шәхси эшҡыуарҙар. Лена Карнаухова ательеһының "Мария-Даниэла" исемле пальто һәм күлдәк коллекциялары, Бөтә Рәсәй музыка йәмғиәтенең Башҡортостан етештереү комбинатынан "Көнсығыш мозаикаһы" коллекцияһы, Өфө дәүләт иктисад һәм сервис академияһын тамамлаған Ғәлиә Хәйруллинаның эштәре еңеүсе булды

✓ Өфөнөң Затон биҫтәһендә ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Ғәрәев исемендәге аллея булдырылды. Ағас ултыртыуҙа дөйөм белем биреү мәктәп-интернаты уҡыусылары һәм педагогтары, 6795-се хәрби часть хеҙмәткәрҙәре һәм Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының Һөнәри әҙерлек үҙәге уҡыусылары ҡатнашты. Ағас ултыртыу акцияһында йәмғеһе 200-гә яҡын кеше ҡатнашты. Улар 30 ҡайын ағасы һәм 30 тирәк ултыртты.

✓ Уҙған ял көндәрендәге йәрминкәләрҙә 2,5 мең тонна продукция һатылған. Йәрминкәләрҙең беренсе көнөнән алып йәмғеһе 22 мең тонна продукция һатылған. Октябрҙәге һуңғы ял көндәренә ауыл халҡы 140 тонна һыйыр ите, 63 тонна суҫҡа ите, 16 тонна һарыҡ ите, 6 тонна йылҡы ите һатҡан. Сауҙа майҙандарында йәшелсә продукцияһы ла тәҡдим ителгән. Ҡала халҡы 949 тонна картуф, 96,6 тонна кишер, 473 тонна һуған, 52 тонна сөгөлдөр, 627 тонна кәбеҫтә һатып алған.

✓ Өфөнөң хеҙмәт баҙарында көсөргәнешлек коэффициенты, йәғни эшһеҙ граждандар менән вакансиялар нисбәте бер аҙ кәмегән һәм әлеге мәлдә 0,68-гә тиң. Баш ҡалала 14 мең самаһы буш эш урыны иҫәпләнә, уларға Өфөнөң Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә теркәлгән 8700 эшһеҙ дәғүә итә. Ҡалала эшһеҙлек кимәле бер аҙ кәмеп, әле 1,56 процентты тәшкил итә. Үҙәктә бөгөн йәмғеһе 9400-ҙән күберәк кеше иҫәптә тора.

✓ БР мосолмандары Диниә назаратында бер аҙна барған аттестация дауамында 70-тән ашыу кеше Башҡортостан мәсеттәрендә ислам нигеҙҙәрен уҡытырға хоҡуктарын раҫлаусы таныҡлыҡтар алды. БР мосолмандары Диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәмәт Нигмәтуллин әйтеүенсә, бындай тикшереүҙәр даими үткәреләсәк. Ул бынан алдараҡ республика мәсеттәре имамдарының да аттестация үтеүен телгә алды.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

Үткән аҙнала баш ҡалала "Селтәр - 2011" сәхнә костюмы республика фестивале үтте. Кейем тегеү оҫталары һәм модельерҙарында башҡорт милли костюмы традицияларын өйрәнеү, һаҡлау, үҫтереүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, улар өсөн үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашыу өсөн ижади мөхит тыуҙырыу, һәләтле оҫталарҙы, коллективтарҙы асыҡлау маҡсатында ойоштороған был фестиваль башҡорт мәҙәни донъяһында быйылғы йылдың иң үҙенсәлекле һәм, иң мөһиме, бик ваҡытлы үткәрелгән сараһы, тип иҫәпләнергә тулы хоҡуҡлы булыуын раҫланы.

МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРГӘ...

ихтыяж ҙурая бара

- Һуңғы егерме йыл эсендә республикала халыҡ ижадына иғтибар көсәйҙе һәм бөгөнгө көндә лә бейемәгән, йырламаған, йола менән шөғөлләнмәгән мәктәптәр, клубтар бик аҙ. Урындарҙа үҙешмәкәр коллективтар барлыҡҡа килеүе һөҙөмтәһендә күпләп милли сәхнә костюмдары тегеү кәрәклеге килеп тыуҙы. Был әште контролдә тотоу мөмкинлеге булмау сәбәпле, сәхнә кейемдәрен халҡыбыҙ зауығына хас булмаған үтә сағыу төҫтәге тукымаларҙан тегеү, ят биҙәктәр һалыу күренештәре барлыҡҡа килде. Бөгөн милли костюм тегеү эшен дөрөҫ йүнәлешкә төшөрөп ебәреү ниәтенән дә үткәрелә был фестиваль. Сөнки Башҡортостанда өс мең тирәһе бейеү коллективы иҫәпләнеп, шуларҙың күбеһе почетлы исем йөрөтә икән, уларҙың костюмдары ла дөрөҫ итеп тегелгән булырға тейеш, - тигәйне Республика халыҡ ижады үҙәге белгесе Нәфисә Тулыбаева. Ысынлап та, һуңғы ваҡытта эшҡыуарҙар араһында милли костюмдар тегеү цехтары асыусылар күп кенә булһа ла, унда башлыса заказ биреүсенең теләгән үтәү менән генә шөғөлләнәләр. Фәнни эш алып барылмау, төбәктең мәҙәни-этнографик үҙенсәлектәрен, һәр ырыуҙың тамғаларын, биҙәктәрен белмәү ошондай аңлашылмаусанлыҡтарға алып килә лә инде. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы оҫоҙло, әммә ҡояшта ялтырап торған биҙәктәр һалынған зауыҡһыҙ ҡытай кейем-һалымы биҙәмәгән кеүек, сәхнәбеҙҙе лә сит-яттар ялтырауығы менән "байытылған" милли кейемдәребеҙ биҙәй алмаясаҡ. Был турала фестиваль сиктәрендә уҙғарылған "Түңәрәк өҫтәл"дә билдәле мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәре лә әйтеп китте.

Фәйзи Фәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбле артистары, ҡурайсы Роберт Юлдашев өсөн сәхнә кейемдәре тегеүсе Бөтөн Рәсәй музыка йәмғиәтенең Башҡортостан етештереү комбинаты баш рәссамы, фестивалдең баһалама ағзаһы Наталья Степанова әйтеүенсә, милли кейем тегеү кеүек үтә лә яуаплы эшкә осраҡлы кешеләрҙең тотоноуы башҡорт кейемендә алтын төҫөндәге биҙәүестәрҙең күпләп ҡулланылыуына килтергән. Көмөш - ваҡыт үтеү менән һарғайыу һәләтенә эйә булған металл, бәлки, саф көмөш тәңкәләрҙән яһалған биҙәнеү әйберҙәре өләсәйҙән ейәнсәргә күсә торғас, һары төҫкә лә ингәндер, әммә алтынға ҡарағанда көмөш әйберҙәр күпкә юғарыраҡ баһаланыуын иҫәпкә алғанда, башҡорт костюмында алтын төҫкә баҫым яһау дөрөҫ түгел. Был - рәссам-дизайнерҙар араһында иң таралған хаталарҙың береһе. Халҡыбыҙ борон тукыманы тәбиғи буяуҙар менән буяғанлыҡтан, кейемдәр башлыса ҡыҙыл, һары, йәшел, һирәгерәк зәңгәр төҫлө тукыманан тегелгән. Бөгөн үтә сағыу шәмәхә, хатта ҡыҙғылт һары төҫтәге күлдәктәр "модаға" инеп бара, был күренеш бигерәк тә ауылдарҙа йыш осрай. Шулай уҡ сәхнәлә миҙгел йолалары, миҙгелгә бәйле эштәрҙе һүрәтләүсе бейеүҙәрҙе борон оло байрамдарҙа ғына кейелә торған кейемдәрҙә башҡарыуға ла күнегеп бөткәнбеҙ. Орнаменттарҙы урынһыҙ йәки артыҡ ҡулланыу тураһында ла һүҙ булды был "Түңәрәк өҫтәл"дә.

Быға тиклем татар милли кейеме тип яңылыш атап йөрөтөлгән төньяҡ-көнсығыш, Пермь башҡорттары милли кейемен дә күрергә насип булды фестивалдә, Балаҡатай районынан килгән "Тамбур" ансамбле баһалама ағзалары иғтибарына үҙҙәренең төбәгенә генә хас костюмдар тәҡдим итте. Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт училищеһы студенттары кейеҙҙән тегелгән милли кейем өлгөләре күрһәтте.

Беренсе "Селтәр" фестиваленең тағы бер биҙәге - башҡорт костюмдарындағы ҡурсаҡтар һәм, әлбиттә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәнеү әйберҙәре күргәҙмәһе. Әлегә халҡыбыҙҙың биҙәнеү әйберҙәрен етештереү бөгөн беҙҙә үҫешмәгән. Был йүнәлештә әле бик аҙ кеше эшләй. Мәҫәлән, Сибайҙан билдәле сәсәниә Асия Ғәйнуллинаның башҡорттоң боронғо кейемдәрен һәм биҙәүестәрен тергеҙеү менән шөғөлләнеүен күптән беләбеҙ. Был күргәҙмәгә лә ул үҙ ҡулдары менән яһаған һаҡалдары, селтәрҙәре, хәситәләрен ҡуйғайны. Шулай уҡ Сибай институты менән Учалы училищеһы студенттары эшләгән милли кейемдәге ҡурсаҡтарҙы күреү ҙә ҡыуандырҙы. Тимәк, киләсәктә "Селтәр" фестиваленең исеме есеменә тура килһен тиһәк, селтәр яһау менән шөғөлләнгән оҫталарҙы тағы ла күберәк йәлеп итергә кәрәк буласаҡ.

Шулай итеп, беренсе тапҡыр ғына үткәрелеүенә ҡарамаҫтан, "Селтәр" фестивале ниндәйҙер мәсьәләләрҙе күтәреү генә түгел, уларҙы хәл итергә тырышыуы менән дә күңелдә матур тойғолар ҡалдырҙы. Башҡорт милли кейеме тураһында сәхнә кейемдәренә ҡарап һүҙ йөрөткән ваҡытта йәшәйбеҙ икән, сәхнә кейеме етештереүҙең индәребеҙгә оло яуаплылыҡ өҫтәүен онотмайыҡ. Әйткәндәй, фестиваль башҡорт донъяһындағы тағы ла бер мөһим проблеманың барлығын хәтергә төшөрҙө. Бөгөн мосолман ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ төрөк фирмалары теккән кейемдәрҙә йөрөй. Был фестивалдә ҡатнашыусы ошо уҡ предприятиелар башҡорт милли үҙенсәлектәрен һаҡлап, гүзәл заттар өсөн көндәлек кейемдәр ҙә тегә башлаһа, моғайын, бындай кейемдәр ҙур һорау менән файҙаланылыр һәм зауыҡлы итеп тегелгән милли костюмдар кейеп йөрөү беҙгә мәртәбә генә өҫтәр ине.

Ләйсән НАФИҠОВА.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Гүзәл ҮҘӘКБАЕВА, Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт училищеһы уҡытыусыһы: Беҙҙең студенттарыбыҙ кейеҙ эшкәртеү менән шөғөлләнә. Кейеҙҙән яһалған ҡурсаҡтар, кейеҙҙән тегелгән милли кейемдәр, ҡабартмалы сигеү ысулы менән тегелгән костюмдар алып килдек. Кейеҙҙән тегелгән костюм кейеп сәхнәгә сығыу беҙҙә әле таралмаған. Ошоно иҫәпкә алып, үҙебеҙсә сәхнә образы тыуҙырырға тырыштыҡ. Кейеҙ әлек ир-аттың баш, аяҡ кейемдәрендә ҡулланылған. Беҙ иһә кейеҙҙән жилет, ҡашмау яһап ҡараныҡ. Ҡайһы бер төбәктәрҙә кейеҙ әйберҙәр киң танылыу яулай бара. Мәҫәлән, Мәскәүҙә төҫлө кейеҙҙән өскөл яулыҡтар ябынып йөрөйҙәр. Был башлыса ижади шәхестәр араһында таралған. Кеҫә телефондары өсөн кейеҙ көптәр ҡулланыусылар ҙа бар. Шулай уҡ кейеҙ муҡсалар йыш осрай. Кейеҙҙән төҫлө биҙәүестәр бик популяр хәҙер. Йәғни кейеҙ бөгөн модала, тип әйтергә кәрәк. Беҙҙә кейеҙ баҫыуҙы киң йәйелдерергә тейешбеҙ. Бигерәк тә башҡортта был шөғөл киң таралған халыҡ кәсебе булған бит. Кейеҙ әйберҙәрҙе үҙебеҙҙең стилдә, милли орнаменттар төшөрөп етештерһәк, отошло булыр ине.

Мәрйәм ЗӘКИРЙӘНОВА, "Башҡортостан" киностудияһы хеҙмәткәре: Бала саҡта ауылда ололарҙың милли кейемдә йөрөүен яҡшы хәтерләйем. Күбеһе өсөн 60-70-се йылдарҙа әле сәкмән, елән көндәлек кейем булды. Бөгөн сәхнә костюмдарына ҡарап, халыҡ кейеме шулай булған икән, тигән хаталы фекер йөрөтә күбеһе. Тормошта башҡорт кейеме күпкә ябайыраҡ булған. Сағыу төҫтәр бик аҙ ҡулланылған. Ялтыр булғанға, алтынды ла тағып бармағандар, башлыса көмөш биҙәүестәр файҙаланылған. Әммә барыбер сәхнә костюмы башҡасараҡ булырға тейештер. Сығыш яһаусы машасыны таланты менән генә түгел, кейеме менән дә йәлеп итергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта ысынбарлыҡтан да тайпылырға ярамай. Һуңғы ваҡытта сәхнәлә милли костюмдарыбыҙҙы урыҫ, мари, сыуаш кейемдәре менән бутай башланылар. Заказ биреүселәрҙең теләгән үтәйем, тип, оҫталар ҙа тарихи дөрөҫлөктө боҙа, күрәһең. Был йәһәттән "Башҡортостан" киностудияһының тегеү цехы хеҙмәткәрҙәре үҙ эшенә яуаплы ҡарай. Өләсәйҙәрҙең һандыктарында һаҡланған кейемдәр беҙҙең өсөн өлгө булып тора. Милли кейем элементтарын көндәлек тормошта барыһы ла файҙалана ала. Бер төркөм милләттәштәребеҙ Австралияға барғанда үҙҙәре менән ситектәр алып сыҡҡан булған. Шуларҙы урындағы халыҡ сират тороп алып бөткән. Сит илдәрҙә беҙҙең милли орнаментыбыҙ төшөрөлгән кейемдәрҙе яраталар. Ә үҙебеҙ һуң ни эшләп уларға ҡыҙыҡһыныу белдермәйбеҙ, битарафбыҙ?

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

Организмды ҡышҡа әҙерлә

Тәбиғәттең матур бер миҙгеле - ҡыш та яҡынлашты. Һыуығтар башланыр алдынан организмығыҙҙы ҡышҡа әҙерләп алығыҙ: ❖ беренсе сиратта ҡалҡан биҙенә иғтибарҙы арттырығыҙ, йодҡа бай үлән - йондоҙаҡ (мокрица), грек сәтләүеге ҡабығының аралыҡтарынан төнәтмә яһап эсергә; ❖ ҡан тамырҙарын нығытыу өсөн ваннаға сиратлап һалҡынса һәм йылы һыу йыйырға һәм атлап йөрөргә; ❖ ҡолаҡҡа массаж яһау ҙа бик файҙалы; ❖ ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә иртәнсәк шәкәрле эҫе сәй, компот эсергә; ❖ ҡар бик ҙур энергия бирә, шуға ла ҡарлы урамдарҙа, паркта йышыраҡ йөрөргә; ❖ йоҡлай алмай башлаһағыҙ, кисен тышта йөрөп инегеҙ һәм 10-15 минут ваннала йыуынығыҙ. Душта йыуынһаң, йоҡо ҡаса.

Ҡышҡы йүтәлдән дауа

❖ күкрәкте ҡоро ҡалын тукыма менән ышҡып, сусҡаның эс майын тәнгә һеңеп бөткәнсе һөртөп ышҡырға. Әгәр булһа, шыршы майы ҡушырға ла була; ❖ ҡара шалҡан һыуын шәкәр йәки бал менән ҡайнатып эсеү ҙә йүтәлдән бик файҙалы.

Һыуыҡ тейҙермәүҙең ябай юлдары

❖ һалҡын тейә торған иң йомшаҡ урын - муйынды йылы тотоғоҙ; ❖ ҡул бирешеп иҫәнләшеүҙән, үбешеүҙән тыйылырға кәрәк - бысраҡ ҡулдан, ауыҙҙан микроб инә, тән ауырый башлай; ❖ өйөгөҙҙә йыш елләтегеҙ, уны бер төрлө температурала тоторға тырышығыҙ; ❖ һарымһыҡ, һуған еҫкәгеҙ; ❖ витаминдарҙы, дөрөҫ туҡланыуҙы онотмағыҙ. Тән сәләмәт булһа, бер һыуыҡҡа ла бирешмәҫһегеҙ.

Һалҡын тейеп, баш ауырыһа

❖ лимон менән маңлай һәм сикәләрҙе ышҡырға; ❖ корицаны ҡайнар һыу менән болғап, әҙ генә шәкәр ҡушып эсергә. Башың түҙеп торғоһоҙ итеп ауыртһа, корицаны ҡалаҡ осо менән түгел, күберәк ҡушып болғарға кәрәк.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Аҡыл кемдә генә булһа ла, эйәһен иң бөйөк дәрәжәләргә күтәрер. Аҡыллы кешенең иптәшлеге яҡшы, уның менән бергә һөйләшеп ултырыу күңелдәргә рәхәт, хәсрәттәргә йыуаныс бирер.*

МИЛЛӘТ ТӘРБИӘЛЕ,

ҡатындары тәрбиәле булһа

Ҡатындар һәр ваҡыт матур булырға тейеш. Матурлыҡ ике өлөштән торор, берәһе - тышҡы матурлыҡ, икенсеһе - йәшерен матурлыҡ. Әҙәм балаһы өсөн иң ғәзиз камиллыҡ булып аҡыл һанала.

Ҡояш донъяны нурға тултырған кеүек, аҡыл да әҙәм балаһының фекерен нурландырыр, зиһенен асыр, үҙен тура юлға күндерер.

Тышҡы матурлыҡ бөтә торған әйбер, ул һәр көндө бөтөп һәм кәмеп тора, ә йәшерен матурлыҡ һәр көндө артып һәм күбәйеп торған мәңгелек бер камиллыҡтыр.

Аҡыл кемдә генә булһа ла, эйәһен иң бөйөк дәрәжәләргә күтәрер. Аҡыллы кешенең иптәшлеге яҡшы, уның менән бергә һөйләшеп ултырыу күңелдәргә рәхәт, хәсрәттәргә йыуаныс бирер. Һәр кем уны йәне һәм тәне менән ысын күңелдән һөйөр. Һүҙе лә иң бөйөк заттарға ҡәҙәр үтеп инер.

Шуға ла ҡатын һәр ваҡыт үҙенең аҡылын тәрбиәләргә һәм арттырырға тырышыр. Аҡыллы булған бер ҡатын тышҡы матурлыҡтан ни ҡәҙәр генә мәхрүм ҡалһа ла, хөрмәтле һәм һәр кемдең күҙе алдында булыр. Аҡыл һәр төрлө ғәйептәрҙе ҡаплар.

Бөйөк ғалим булған бер кеше өйләнергә булғас, дуҫтары уға бер туған ике ҡыҙҙы күрһәткән. Ҡыҙҙарҙың береһенең күҙендә кәмселеге булған, әммә аҡыллы, икенсеһенең аҡылы ул дәрәжәлә булмаһа ла, ғәйәт сибәр. "Ҡайһы ҡыҙҙы алырға теләйһегеҙ?" - тигәнгә, "Аҡыллыһын алырмын", - тигән.

Тышҡы матурлыҡ та Аллаһы Тәғәләнең бер бүләге булып, бындай бүләккә осраған ҡатын да бының менән тәкәбберләнеү түгел, бәлки, "ниғмәт - байлыҡ", тип, шөкөр итергә тейеш. Тышҡы матурлыҡ, әгәр ҙә эйәһенең ғәмәле сәбәпле булһа - яһалма, тыумыштан булһа - тәбиғи матурлыҡ тиелер.

Яһалма матурлыҡ тигәндә, йөҙ, ҡул, муйынды аҡ һәм ҡыҙыл буяуҙарға, сәстәрҙе ҡараға буяу һәм ҡаштарҙы йолҡоу тип аңланмаһын. Сөнки был әйберҙәр матурлыҡ булмайынса, бәлки, сәләмәтлеккә зарар килтереүсе зәһәрҙәрҙер. "Яһалма матурлыҡ" тип таҙалыҡ һәм паклыҡҡа әйтелер. Таҙалыҡ - иң гүзәл бер матурлыҡ һәм ябай һыу һәм һабындан башҡа бер нәмәгә мохтаж булмағанлыҡтан, аҙ сығымлы бер биҙәнеүҙер.

Донъяла ирҙәрҙең яратмаған нәмәләре булһа, ул - бысраҡ һәм әшәке йөрөгән ҡатындар. Бындай бер ҡатын, хатта ирен диуана булырлыҡ бер дәрәжәлә һөйһә лә, иренең күңелен шатландыра алмаҫ. Шул сәбәпле, яҡындарына, дуҫтарына хәл белергә ниндәй сифатта китһә лә, ире ҡаршыһында булғанда һис шикһеҙ гүзәл сүрәттә һәм ғәйәт пак ҡиәфәттә булырға тейештер.

Тәбиғи матурлыҡ - сәләмәт кәүҙәле, һөйкөмлө, пак күңелле, өҫ-башы ябай ғына, ләкин таҙа, аҡылы сәләмәт, итәғәтле булыуҙан ғибәрәттер.

Әгәр ҙә бер кешелә мәғәнәүи матурлыҡ өҫтөнә тәбиғи матурлыҡ та булһа, әлбиттә, нур өҫтөнә нур буласаҡ. Ләкин бындай ҡатындар табыуы мөмкинме?

Алтын һәм башҡа ҡиммәтле ҡаҙылма байлыҡтар Урал тупрағында күмелеп ятҡан кеүек, беҙҙең дә тәрбиә бирәсәк һәләтле ҡатындарыбыҙ, бәлки, беҙ уйламаған да ерҙә томаланып йәшәп яталыр.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ



Унынсы һабаҡ: "Тыуған ил тойғоһо"

- Балам сит илдә уҡыуын тамамлай инде быйыл.
- Эшкә үҙебеҙгә ҡайталыр?
- Юҡ. Бында ни эшләһен, кем көтөп тора уны? Америкаға китә.
- Америкала көтөп торалармы?
- Унда барыбер йәшәү еңелерәк.
- Һин үҙең унда йәшәп ҡараныңмы?
- Бөтөнөһө әйткән фекерҙән сығып әйтәм.
- Ә аҙаҡ һағынмаҫмы? Һиңә үпкәләмәҫме?
- Уныһын әйткәйнем дә ул. "Һағыныу тигән тойғо миндә юҡ. Һинең һағыныр туғандарың, ауылың, йылғаң бар. Ә минең нимәм бар бында? Подъезмы, стена аша йәшәһәләр ҙә ғүмерҙә лә күрмәгән күршеләрме? Бындай бейек йорттар, асфальт тегендә лә бар", - тине лә ҡуйҙы. "Ә һинең менән интернет аша көн һайын аралашырбыҙ", - ти. Ни әйтәһең инде уға?

Танышым менән булған был һөйләшеү мине уйландырҙы. Ысынлап та, ауылдан айырылған, тамыры бер ҡайҙа ла ерекмәгән, йәғни ергә тамыр ебәрмәгән ҡала балаһына тыуған ил тойғоһон нисек һалырға? Кәрәкме уларға был тойғо? Заман башҡа, заң башҡа, әйҙә, нисек теләйҙәр - шулай йәшәһендәрме?

Иң элек "Кәрәкме?" тигән һорауға яуап бирәйек. Әлбиттә, кәрәк. Беренсенән, һағыныу, юҡһыныу, бошоноу һәм башҡа шундай һағышлы тойғолар - тәбиғи кисерештәр һәм беҙҙең ҡанға һалынған да ҡасан да булһа үҙен һиҙҙерә торған хистәр. Һиҙҙереү осоронда инде тыуған иленән айырылған кеше үҙенең ни тиклем ныҡ хаталанғанын аңлай һәм төрлөсә кисерә, уйламаған эҙемтәләр булыуы ла ихтимал.

Билдәле булыуынса, кеше ғүмере ете йыллыҡтарға бүленә. Ете йыл һайын кеше физик яҡтан ғына түгел, ә эске булмышы яғынан да үҙгәреш кисерә. Етенсе ете йыллыҡ - хистәр өҫтөнлөк иткән осор. Быны ошо мәлдә башлана ла инде кешенең үткәнен, бала сағын, йәшлеген, атай йортон һағыныу осоро. Бығаса күҙгә эленмәгән һәр нәмә: берәй төҫмө, көймө, осраҡлы кеше ҡиәфәтеме - ни генә булмаһын зиһенеңдә, хәтерләүҙәр ҡылт итеп кенә ҡала ла үҙәк өҙҙөргөс һағышҡа әйләнә. Быны шул саҡта инде ҡасандыр иҫәпкә лә алынмаған подъезың да, ҡыҫыла-төртөшә ултырып киткән автобустарың да, тая-бата атлаған батҡаҡ юлдарың да, һинең менән тупаҫыраҡ һөйләшеп үткән күршең дә - бөтөнөһөн дә йәнгә яҡын, йылылыҡ бөркөп торған иҫтәлек итеп хәтергә төшөрәһең. Әммә йәшәгән ереңдән һурылып сығып ҡына ҡайтып китә алмайһың. Унда - ғаилә, балаларың, эшең. Шул уҡ ваҡытта йән аҙығы алырлыҡ бер ни ҙә булмағанлығын да төшөнәһең. Һин эшеңдә - хеҙмәткәр, тырыш, һәйбәт, маҡтаулы белгес, өйөңдә - күптән инде ят телдә һөйләшеп, үҙ теленде, үҙ моңоңдо онотоп, әле йәшәгән ил халҡына яраҡлашып көн күргән ғаилә ағзаһы (атай-әсәй булыу яҡынлығы самалы, ундай тойғо балалар үҫә килә фәкәт ҡараштар, маҡсаттар уртаҡлығы, тел-моң берлеге аша ғына нығытыла), йәшәгән йортоңда - файҙаң тейерлек булһа ғына яҡшы күрше. Ҡасандыр һинең өсөн ихлас тойолған өлкәндәр (ҡайһы берәүҙәр ҡайным-ҡәйнәм шул тиклем һәйбәт, икенсе милләттән, икенсе илдән булһам да яҡын итеп торалар, тиҙәр) күптән инде гүр эйәһе... Ғүмер уртаһында бына ошондай кисерештәр солғап ала кеше булмышын. Ошонда башлана ла инде үкенеүҙәр, ярға сығарып ырғытылған балыҡ кеүек тыпырсыныуҙар, кемделер ғәйепләү, атай-әсәйгә үпкәләү... (Сит илдәрҙә йәшәүсе милләттәштәр менән интернет аша аралашҡанда, үкенеүле хаттарҙың авторҙарының йәшен һорайым һәм ошо фекерҙең дөрөҫлөгөнә ышанам). Ни эшләп был турала элегерәк уйламаным, ни эшләп берәйһе әйтмәгән миңә, тигән үкенестәрҙән тора ул аралашыуҙар, зар илауҙар. Шуныһы ҡыҙыҡ, бындай зарланыуҙар, кемдән генә, ҡайһы тарафтарҙан ғына булмаһын, бер үк фекерҙе ҡабатлай, хатта бер үк һүҙҙәрҙән тигәндәй тора.

Башҡорт халҡының бөйөк эпосы "Урал батыр"ҙа әйтелгәнсә, балаға үҙең теләгән тәрбиәне, һабаҡты бәләкәй сағында һалырға кәрәк. Аҙаҡ, Шүлгән йәшендә (эпоста Шүлгәнгә ун ике йәш), баланың донъяға үҙ һәм үҙенсә ҡарашы формалашҡанда, фекерен тыйыуҙар, өгөт-нәсихәттәр менән генә үҙгәртеп булмай. Ул саҡта инде кеше үҙтәрбиә менән генә үҙен үҙгәртә ала. Тәрбиә фәҡәт үҙтәрбиәгә йүнәлеш биреүҙән генә ғибәрәт буласаҡ.

Сабыйға ил тойғоһо һалыу нимәнән башлана һуң? Әлбиттә, ғаиләнән башлана. Иң тәүҙә үҙеңде, тимәк, атай менән әсәйҙе яратыуҙан. Атай менән әсәйҙе яратыу - уның телен, йола-ғәҙәттәрен, милләтенең тарихын яратыу, белеү, дауам итеү, уларҙың йәшәү маҡсатын уртаҡлашыу, ҡарыуы ҡайтҡан көндәрендә һағындырып зар-интизар итмәү хәстәрлеге күреү икәнлеген аңлау ул.

Икмәк-тоҙлоҡ ҡына туған телдә аралашыу - күңел яҡынлығына нигеҙ була алмай. Баланың бөтөн булмышына ғүмер буйы йылылыҡ һирпеп торорлоҡ иҫтәлек һалынырға тейеш бала саҡтан.

Уны ҡала шарттарында ла һалып була. Әйтәйек, өйҙә ял көндәре милли аш әҙерләнең ти. Өҫтәл тирәләп ғаилә ағзалары ултырҙы, әсәй менән өләсәй өҫтәлгә боҫорап торған бәлеш ултыртты. Һәр береһенең алдына бәләкәй ҡоштабаҡ ҡуйып, йола буйынса иң өлкәндәргә, шунан һуң балаларҙың иң бәләкәйенән башлап өләшеп сыҡтың. Өләсәй (әгәр бергә йәшәһә, айырым йәшәһә, ул килгән саҡтарҙа) мәҡәл йә әйтем әйтеп, ошо тәртиптең дөрөҫлөгөн раҫлап ҡуя, ҡыҙыныңмы, киленееңме аш-һыуға оҫталығын маҡтап та ала. Ошо рәүешле ғаилә яратып ашар ризыҡ әҙерләп, нирәкләп булһа ла ҡалала йәшәүсе туғандарҙы йәки яҡын дуҫтарыңды балалары менән бергә саҡырып алырға мөмкин. Мәҫәлән, бәлеш, бишбармаҡ, ҡоймаҡ бешереп, буҙа ҡайнатып һәм башҡа шундай милли аштар менән ғаилә байрамдары үткәреп алыу. Ризыҡты үҙ атамаһы менән әйтеү, борон нисек бешергәндәрен телгә алыу, берәй ҡыҙыҡлы иҫтәлек һөйләп ҡуйыу, мили музыка тыңлау, бергәләшеп йырлау, таҡмаҡ әйтеү...

Ни өсөн кәрәк былар? Ҡытай туҡмасын ебетеп ашау йәки колбаса ҡушып салат яһауҙы илдең бөтөн мөйөштәрендә лә күргән лә, тәмләргә лә мөмкин. Ундай ризыҡ, әлбиттә, бер ҡасан да һағыныу тойғоһо уятмаясаҡ. Өй йылылығы бөркөп торған ошондай иҫтәлектәр генә күңеленде ҡытыҡлап ҡуясаҡ.

Күмәкләшеп китап уҡыу йәки бергәләшеп йырлау, концерт-театрға йөрөү, аҙаҡ фекер алышыу, сәйәхәттәргә сығыу, күңелгә яҡын дуҫтар менән бергә алыҫ сәйәхәттәр яһау, төнгө уҫаҡ янында ер-һыу атамалары хаҡында легендалар һөйләү, шул уҡ ваҡытта бай, һутлы туған телдә аралашыу, мөмкинлек булғанда, туған моңдарҙы тыңлау - былар барыһы ла балаң күңеленә һеңә барасаҡ һәм ул, үҙ яҙмышын үҙе хәл иткән саҡта: "Юҡ, быларһыҙ мин йәшәй алмаясаҡмын!" - тип әйтәсәк. Ҡыҫҡаһы, туған тел мөхите менән бергә өйҙә, баланы уратып алған бәләкәй генә мөхиттә, ошо тел мөхите менән бәйле традиция, йола-ғәҙәт, аш-һыу, йыр-моң, тәрбиә һабаҡтары - тотош һалынырға тейеш һәм ошо рухи байлыҡты үҙендә туплаған йәшәү һуҡмағы артабан, оло донъяға алып сыҡҡас та, иң тәү һалынған күңел күркәмлеге кешене ғүмере буйы оҙатасаҡ һәм хатта һәр төрлө тайпылыштарҙан ҡурсалап торасаҡ. Ышаныслы, мөмкинлектәре сикһеҙ, быуаттар дауамында һыналған тәрбиә ҡанундары тупланған бит ул халыҡ традицияһында. Тырым-тырағай таралышып бөтөүҙән, юҡҡа сығыуҙан халыҡ традицияһы ҡурсалап, бергә уҡмаштырып тотоп килгән һәм артабан да шулай буласаҡ.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

28-29 октябрҙә Өфө ҡалаһында Әҙеһәм Исҡужин исемендәге III Асыҡ ҡала ҡурайсылар конкурсы үтте. Баштан уҡ шуны әйтеп үтке килә: атаҡлы ҡурайсы һәм педагог исемендәге был конкурс йылдан-йыл камиллаша, мәртәбәлерәк була бара. Конкурсты ойоштороусылар: Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы (идаралыҡ начальнигы Исламетдин Мәмбәтов, ярҙамсылары - Гөлшат Әҙелғужина, Айгөл Хәйруллина), шулай уҡ Әҙеһәм Исҡужиндың уҡыусылары Юлай Ғәйнетдинов, Азат Айытҡолов, Әнүәр Шафиҡов, йырсы Тәнзилә Үҙәнбаева сараны ижади һәм йәнле итеп уҙғарыуға күп көс һалған. Был юлы 16 йәшкә тиклемге ҡурайсыларҙан - 25, унан өлкәндәрҙән 13 сәнғәт маһиры көс һынашты.

ХАЛЫҠСАНЛЫҠ КӨСӨ...

ҡурайсылар конкурсында нығыраҡ сағылды

Ҡурай йырсыһы

Әҙеһәм Исҡужин исемендәге был конкурстың үҙенсәлеге шунда: унда ҡатнашыусы атаҡлы ҡурайсы репертуарынан булған көйҙә ҡурайҙа уйнарға һәм йырларға тейеш. Минең ҡарамаҡҡа, быға тиклемге үткән ике конкурста ҡатнашыусылар төп иғтибарҙы ҡурайға йүнәлтә һымаҡ ине. Уларҙың бәгзеләре башта һажлатып ҡурай уйнап ебәрер ине лә, йырҙарын уға ҡушымта һымаҡ, илкеһалҡыңҡыраҡ итеп башҡарҙы. Ҡурайҙа шәп уйнауҙары ышығында йырҙың көйөн боҙоңҡорап йырлап төшөүселәр ҙә күренгеләй ине. Был юлы сығыш яһаусы һәр кемдең әҙерлек кимәле шул дәрәжәлә, уларға: "Был профессиональ йырсымы?" тип аптырап ултырҙыҡ. Иң ҡыҙығы: был ҡурайсылар вокаль бүлегендә уҡыған йырсылар кеүек йырламай, улар ҡурайсы булып йыр башҡара, йырҙың бөгөлөштәрен ҡурай моңо аша тоя. Бындай башҡарыу өсөн махсус вокаль белем кәрәкмәй, сөнки вокаль бүлектә тауыш "ҡалыпҡа" ҡыуып индерелә һәм уның халыҡсанлығы, тәбиғилеге юғала. Мин вокаль бүлектә уҡыған бер йырсыны ла кәмһетмәйем, әммә, миңә ҡалһа, ҡурай йырсыһы йөрәккә ятышлыраҡ, күңелгә яҡыныраҡ барыбер. Был йәһәттән киләсәктә вокаль бүлеге уҡытыусыларын бер үк ваҡытта Зәһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтовтар һымаҡ ҡурайсы итеп тә күрге килә. Был конкурс киләсәктә халыҡсан йырсыларҙы нисек итеп әҙерләргә кәрәклекте лә аңлатып тора беҙгә. Сәнғәттә "йырсы-ҡурайсы", "ҡурайсы-йырсы" тигән төшөнсәләр бар. Мин бында иһә, "ҡурай йырсыһы" тигән терминды махсус рәүештә киллтерҙем. Минеңсә, Әҙеһәм ағай Исҡужин үҙе лә тап шундай ҡурай йырсыһы ине. Ҡурайсы һәм йырсы Ишмулла Дилмөхәмәтов феноменының да асылы тап шунда, ҡурай менән йырҙы тигеҙ итеп бергә ҡуша алыуында бит. Был йәһәттән элекке конкурстарҙа ҡурай менән йыр 75-25 нисбәтендә булһа, быйыл был нисбәт 50-50 процентты тәшкил итте, булһа кәрәк.

Үҫмерҙәр ҙә ҡыуандырҙы

16 йәшкә тиклемге ҡурайсыларҙың яртыһының, өлкәндәрҙең көллөһөнөң тиерлек икенсе турға үтеүе уларҙың конкурсҡа етди әҙерләнеүе тураһында һөйләй. Тағы ла быйыл йәш ҡурайсылар Арыҫлан Оморҙаҡовтың, Айназ Низаметдиновтың, Әлмир Суриндың I урынды бүлешеүе лә күпкә ишара. Тимәк, киләсәктә был конкурс тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ, тағы ла зауыҡлыраҡ буласаҡ. Ғөмүмән, йәш ҡурайсыларҙың байтағы быйыл 16 йәшен тултыра, улар ике йылдан өлкәндәр сафында конкурста ҡатнашасаҡ, тимәк, уларға ҡурайҙа уйнауҙан тыш, йырларға ла тура киләсәк.

Ҡурайсылар конкурстарында башҡа милләт вәкилдәренең, башлыса ҡыҙҙарҙың ҡатнашыуы хәҙер инде матур йолаға әүерелде, тиһәк тә була. Башҡорт халыҡ йырын ҡурайҙа башҡарыу өсөн нота грамотаһы, техник оҫталыҡ, музыкаль белем генә етмәй, уны йөрәгең менән тойорға, күңелең аша кисерергә, рухың аша үткәрергә кәрәк. Был йәһәттән башҡа милләттән булған баш ҡала үҫмерҙәренең һәм йәштәренең ҡурайға, башҡорт сәнғәтенә ынтылышын уларға дәүләт теле булараҡ башҡорт телен, башҡорт милләте, тыуған яҡ тарихын уҡытыу һөҙөмтәһе итеп ҡабул итергә кәрәктер. 2009 йылда үткән конкурста Елена Сват тигән ҡыҙ ҡатнашып, лауреат булғайны. Быйыл да Кристина Лазарева тигән ҡыҙыҡай ҡурайҙа уйнап, беҙҙе һоҡландырҙы. Ул "Циалковский", "Сыңрау торна" көйҙәрен үҙенсәлекле итеп башҡарҙы.

Тағы ла буранбайҙар...

Конкурста Баймаҡ районынан 5 кеше ҡатнашһа, шуларҙың өсөһө Буранбай ауылынан. Үҙем дә шул ауылдан булғас, егеттәргә: "Кемдең ҡайһы конкурсҡа барырын алдан һөйләшһәгеҙ ни була, жюри һәр саҡ кемегеҙҙе еңеүсе итергә белмәй хитлана", - тип шаяртып торҙом. 2009 йылғы конкурста ауылдашым Рәмил Ҡотдосов Гран-при яулаһа, быйыл ул исемгә Буранбай ауылы егете Иҙел Аралбаев лайыҡ булды. Был юлы тәүге тур ваҡытында беҙ, жюри ағзалары, эстән генә, 2009 йылда I урынды алған Юнир Һағынбаев был юлы ла һынатмаҫ, тип уйлап ултырғайныҡ, юҡ, ауылдашыбыҙ Иҙел икенсе турға сыҡты ла, тетрәндергес итеп "Буранбай" ҙы йырланы ла ебәрҙе. Ауылдашыбыҙ Илнур Балхин иһә өлкәндәр араһында III урынға сыҡты.

ШУЛАЙ ИТЕП...

16 йәштән өлкәндәр араһында урындар һәм номинациялар:
Гран-при - Иҙел Аралбаев
I урын - Юнир Һағынбаев
II урын - Әсҡәт Хәйернуров, Илсур Йосопов, Шамил Үтәмешов.
III урын - Илдар Юнысов, Илнур Балхин, Марсель Вахитов.
Дипломанттар: Илнур Ҡоляхмәтов, Рифат Йәмлихин, Муса Нурдәүләтов.
Рәмзит Әбсәләмов - Башҡортостандың төнъяҡ-көнбайышында ҡурай сәнғәтен үҫтереүҙәге фиҙаҡәрлеге өсөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының "Ал да нур сәс халҡыңа!" миҙалы менән бүләкләнде.
"Иң өлкән ҡурайсы" - Баймаҡ районынан 83 йәшлек ҡурайсы Хәким Моратов
16 йәшкә тиклемге ҡурайсылар араһында урындар һәм номинациялар:
I урын - Арыҫлан Оморҙаҡов, Айназ Низаметдинов, Әлмир Сурин.
II урын - Әмир Ғәниев, Кристина Лазарева, Альберт Лотфуллин.
III урын - Ислам Илембәтов, Шәфҡәт Баязитов, Айҙар Әйүпов (был ҡурайсыларға Фәнис Исхаков аҡсалата премия тапшырҙы).
Дипломанттар: Ленар Хәбибуллин, Мөхәмәт Уразбаев, Роберт Исламов, Арсан Супанов.
"Иң йәш ҡурайсы" - Өфө ҡалаһынан 9 йәшлек Шамил Байтимеров.

Әхиәт ҒӘЙЕТБАЕВ,
БР атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Өфөнөң Әҙеһәм Исҡужин исемендәге музыка мәктәбе директоры, жюри ағзаһы.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

"ЭСКЕ" ҺӘМ "ТЫШҠЫ" БАШҠОРТТАР

Билдәле тарихсы һәм сәйәхәтсе әл-Мәсүди (956-сы йылда вафат була) IX быуатта төрки ҡәбиләләренең Европаға хәрәкәтенең сәбәбе булып "Гурганча диңгеҙе эргәһендә"ге (Арал диңгеҙе) "дүрт төрки ҡәбиләһе - бәжәнәктәр, баджандар, баджгардтар, наукердтар менән гуздар, каблуктар һәм кимәктәр араһындағы" көрәш тора, тип яҙа. Шулай уҡ ул баджандар, бәжәнәктәр, баджгардтар һәм наукердтар хазарҙарҙың, аландарҙың күршеһе булып тора, Византия менән Валандар ҡалаһы өсөн һуғышта ҡатнаша, тип хәбәр итә. Икенсе урында, Ҡара диңгеҙ тураһында бәйән иткәндә ул: "астрономдарҙың һәм боронғо ғалимдарҙың был диңгеҙ тураһындағы күрһәтмәһе буйынса, Ҡара диңгеҙ булғарҙарҙың, рустарҙың, нуғайҙарҙың, печенегтарҙың һәм баджгардтарҙың диңгеҙе булып тора", тип раҫлай.

XII быуаттағы ғәрәп авторы Шәриф Иҙриси (1162 йылда вафат була), башҡорттар Кама тамағында йәшәй, тип яҙа. Уның башҡорттар тураһындағы ҡыҫҡа мәғлүмәттәрен рус телендә Хвольсон баҫтырып сығара. Иҙрисиҙең башҡорттар тураһындағы мәғлүмәттәрен "Башҡорттар тарихы"нда З. Вәлиди тулыраҡ итеп бирә.

Иҙриси "эске" һәм "тышҡы" башҡорттар тураһында һүҙ йөрөтә. "Тышҡы" (бында Урал башҡорттары күҙ уңында тотола) башҡорттар далала һәм сүллектә йәшәй. Юлдар бик насар. Яйыҡтың үрендә бәләкәй генә Немжан ҡалаһы бар. Был ҡаланан һигеҙ көнлөк юлда Ирәндек тауы бар. Унда 1000-дән ашыу кеше мейестәрҙә баҡыр иреткән. Иретелгән баҡыр Хорезмға һәм Ташкентҡа һатыуға оҙатылған. Бында табылған төлкө һәм ҡондоҙ тиреләре Хазар диңгеҙе яғына оҙатыла. Тауҙарҙа һәм йылғаларҙа бик ҡиммәтле таштар бар. Немжандан һигеҙ көнлөк юл алыҫлығында ҙур Гурхан ҡалаһына барып эләгергә мөмкин. Ул Ағиҙелдең төньяҡ өлөшөндә урынлашҡан. Гурханда, башҡа халыҡтарҙан айырмалы, сәнғәттең сифатлы, матур өлгөләрен, эйәрҙәр һәм ҡорал эшләйҙәр.

"Эске" башҡорттар (булғарҙарҙың күршеләре) Ҡараҡыянан төньяҡҡа ун көнлөк юл арауығында урынлашҡан. Бындағы башҡорттар рухи яҡтан бик көслө һәм ҡаһарман кешеләр. Уларҙың кейемдәре булғарҙар менән бер иш, улар оҙон халаттар кейә".

Башҡорттар тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр Рәшид-әд-Диндең "Йылъяҙмалар тупланмаһы"нда ла теркәлгән. Был хеҙмәтте төҙөгәндә авторға ҡытай, монгол, һинд, европа ғалимдары һ.б. ярҙам иткән. Рәшид-әд-Диндә башҡорттар өс тапҡыр һәм һәр саҡ ҙур халыҡ булараҡ телгә алына. Төрки халыҡтары ултырған урындарҙың сиктәрен билдәләп, ул: "Боронғо ваҡыттарҙан алып беҙҙең көндәргә тиклем төрки тип аталған халыҡтар Дәште-Ҡыпсаҡта, рустар, черкестар, башҡорттарҙың Таласа һәм Сайрама, Ибирь һәм Сибир, Булар һәм Анкара йылғалары өлкәһендәге ҡырҙарҙа, яландарҙа, тауҙарҙа һәм урмандарҙа йәшәгән", - ти.

Татарҙарҙы ҡылыҡһырлап ул: "...Хитай, Хинда һәм Синда, Чина һәм Мачина өлкәләрендә, ҡырғыҙҙар, кеҙарҙар һәм башҡорттар илдәрендә, Дәште-Ҡыпсаҡта, унан төньяҡ райондарҙа, ғәрәп ҡәбиләләрендә, Сүриәлә, Мысырҙа, Мароккола барлыҡ төрки ҡәбиләләрҙе әле лә татарҙар тип атайҙар", - тип яҙа.

Рим ЙӘНҒУЖИН,
тарих фәндәре докторы, профессор.

Ун быуаттан артыҡ дәүерҙә Ислам дине халҡыбыҙға рухи нигеҙ һәм йәшәү ҡануны булып хеҙмәт итте. Ләкин бер нисә тиҫтә йыл дауамында динебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ бер-береһен байытып килеүҙән тукталып торҙо. Бына, ниһайәт, һуңғы йылдарҙа йәмғиәтебеҙҙә дингә ҡайтыусылар күбәйә. Халҡыбыҙҙың үҙ диненә, асылына ҡайтыуы ҡыуаныслы хәл, ләкин шуның менән бергә был өлкәлә күп кенә һорауҙар, аңлашылмаусанлыҡтар, фекер айырмалыҡтары ла килеп тыуа. Бөгөн ошо үҙебеҙҙе борсоған ҡайһы бер һорауҙарға журналист, Башҡортостан юлдаш телеканалында "Йома" һәм радиоканалында "Иман" тапшырыуҙарын алып барыусы Морат ЛОҠМАНОВ яуап бирә.

Ниңә мәсеттәр бикле?

Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙың һәр бер ауылында тиерлек мәсеттәр асылды. Ләкин уларҙың күп осраҡта бикле тороуы, асылған хәлдә лә халыҡтың изге йортҡа йөрөмәҫ өсөн төрлө сәбәптәр табыуы күңелде төшөрә. Ауыл мәсеттәре нисек эшләргә һәм уның имамы ниндәй булырға тейеш? Халыҡты изге йортҡа нисек ылыҡтырырға? Был һорауҙар бөгөн һәр иманлы кешене борсой һәм уны хәл итеү күп ваҡыт беҙҙең имамдарыбыҙға, йәғни дин әһелдәребеҙгә лә бәйле.

Ләкин булараҡ ҡабул итә лә инде: исем ҡуштыра, доға ҡыла. Ә уның "етәкселек" тигән мәғәнәһен беҙ күп осраҡта ниңәлер инҡар итәбеҙ, йәғни ғәмәлдәребеҙҙе Ҡөрьәндә әмер ителгәнсә үтәмәйбеҙ. Ошоно ентекләп аңлау мөһим. Әгәр ауыл имамы мәсетте асып, бер үҙе булһа ла аҙан ҡысҡырып, биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмай уҡыһа, шулай иткән хәлендә йөрәгендә ихласлыҡ булһа, Аллаһы Тәғәләнең хикмәте менән халыҡ ошонда киләсәк. Ә инде көтөп ятҡан осраҡта халыҡ үҙенән-үҙе генә изге йортҡа йөрөй башламаясаҡ. Мәсеттәрҙе һала башлаған ваҡытта уҡ йөрәктә ихласлыҡ, изгелек, яҡшы ниәт булырға тейеш. Мәсет иң тәүҙә йөрәктә барлыҡҡа килергә тейеш. Әгәр ниндәйҙер ауылда намаҙ уҡыусы ике генә кеше булып та, улар ҡайҙа ла булһа урын табып, Раббыбыҙға ғибәҙәт ҡыла, ошо йүнәлештә эшмәкәрлек итә икән, уларға Аллаһы Тәғәлә үҙенең хикмәте һәм бәрәкәте менән күркәм бер мәсет бирер. Артабан инде был мәсеткә халыҡ та йыйылыр. Ихласлыҡ, кешеләрҙең теләүе, ихтыяжы кәрәк. Әгәр ниндәйҙер ауыл халҡының мәсеткә ихтыяжы булмаһа, тимәк, был ауыл өлгөрмәгән - унда төҙөлгән мәсет барыбер буш торасаҡ.

Ҡарт имам, йәш имам…

Әйтеүебеҙсә, күп мәсеттәрҙә имам ролен хаҡлы ялға сыҡҡан олатайҙар башҡара. Уларҙың имам булыуы бер ҙә насар түгел. Оло кешелә бәрәкәт бар, тип тә әйтәләр. Ләкин бөгөнгө көндә арабыҙҙа элекке ныҡлы иманлы бабайҙар һирәк осрай. Әлхәмдулилләһ, уларҙың яҡшы нигеҙ һалып, эскелектән ситләшеп, боҙоҡлоҡтан арынып, иманлы юлға аҙым яһаулы үҙе үк яҡшы күренеш. Шулай ҙа бөгөн халыҡтың интеллектуаль үҫеше ҙур, уларға был имамдың ғына мәғлүмәт еткереүе, ниндәйҙер йолаларҙы үтәүе етмәй. Һөҙөмтәлә халыҡтың уның артынан эйәрмәүе лә ихтимал. Бер олоно, бер кесене тыңла, тигән әйтемде иҫтә тотоп, оло имам янына уҡып ҡайтҡан йәш хәҙрәт ҡушылып, ике имам бергә эшләһә, яҡшыраҡ булыр ине, ләкин был тәҡдимгә күп осраҡта ололар үҙҙәре ҡаршы килә, йәнәһе, йәштәр уларҙың урынын яуларға килгән. Шулай уҡ йәштәр яғынан да яңылышлыҡтар күҙәтелә. Улар әҙәп тигән төшөнсәне онотоп, туранан-тура ололарҙы ғилемһеҙлектә ғәйепләп, тәнҡитләп ташлай, мәсеттәргә урынлашып, кинәт кенә үҫеп китергә уйлай. Ошондай ҡаршылыҡтар булған өсөн дә бөгөн мәсеттәребеҙ үҙ йүнәлешендә ыңғай ғына эшләп китә алмай.

Дәүләт дингә ҡыҫылмай…

Имамды халыҡ үҙе ҡарарға, үҙе аҫырарға тейеш. Йәғни, был мәҫәлә ике яҡлы: имам - халыҡҡа, халыҡ - имамға кәрәк. Күп ауыл имамдары хөкүмәттең мәсеттәрҙе ҡарамауына зарлана. Шуны иҫтә тоторға кәрәк: беҙ ислам дәүләте лә, шулай уҡ исламға ҡаршы дәүләт тә түгел. Ләкин хөкүмәттең үҙенең айырым талаптары, маҡсаттары бар. Уның менән ярашып матур итеп йәшәргә була. Әгәр ошо дәүләт дингә эйә булып, матди ярҙам күрһәтә башлаһа, дин әһелдәренә үҙенең талаптарын да күсерер, шул сәбәпле ҡайһы ваҡыт дингә ҡарата талаптар ҙа килеп сығыр ине. Шуға күрә диндең бөтөнләйе менән дәүләткә ҡарауы ла дөрөҫ түгел. Ә халыҡ дин әһелдәрен һәр ваҡыт үҙе ҡараған. Был уға бер ниндәй ҙә ауырлыҡ тыуҙырмай, сөнки Аллаһы Тәғәлә уға хәйер-саҙаҡа иҫәбенә бәрәкәт бирә. Хәйерҙән аҡса кәмемәҫ, киреһенсә, артыр, тиелә бит.

Ауылға имам булып ҡайтҡан йәш белгестәр ифрат күп ауырлыҡтарға осрай. Хәҙер ошо төрлө ауырлыҡтарға осраған йәш имам менән ер йөҙөнә Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешеләрҙе тура юлға күндереү, дин таратыу, Ҡөрьән китабын аңлатыу маҡсатында ебәрелгән бәйғәмбәрҙәрҙең оҡшаш торошон эҙләйек. Әйтәйек, һуңғы бәйғәмбәр Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьән индерелгәндән һуң Мәккә ҡалаһында шәриғәтте аңлата башлай. Дин таратыу уға тәүге осорҙа ныҡ ауырға тура килә. Иҡтисади ауырлыҡтар килеп тыуа, сауҙа ишектәре ябыла, бәйғәмбәргә ҡаршы бойкот иғлан ителә. Бәйғәмбәр яҡлылар бик әҙ була, етмәһә, уға тәүгеләрҙән булып эйәргән ҡолдарҙың да бер ниндәй яҡлаусыһы булмай. Бәйғәмбәребеҙҙең артынан эйәреүселәрҙе ислам дошмандары ниндәй генә язаға тарттырмай: ағастарға бәйләп ҡуйып, эҫелә тоталар, күҙҙәрен соҡоп алалар. Ләкин, ниндәй генә ҡаты һынауҙарға дусар булһа ла, Бәйғәмбәребеҙ үҙенең маҡсатынан кире ҡайтмай, өмөт, ихласлыҡ, сабырлыҡ, Аллаһҡа инаныу менән Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн ошо юлдан барыуын дауам итә. Ваҡыты еткәс, еңеү килә һәм халыҡ төркөм-төркөм булып дин ҡабул итә. Ислам күтәрелә һәм хатта үҙ дәүерен иҡтисад, мәҙәниәт, мәғариф һәм башҡа өлкәләр буйынса әллә нисә йөҙ йылға үтеп китә. Фән өлкәһендәге ҡайһы бер терминдарға күҙ һалһаҡ, химия, география, алгебра кеүек фән атамалары бөтәһе лә ғәрәп теленән килеп сыҡҡан. Медицина буйынса ла Европа нисә йылдар буйы мосолман ғалимдарының хеҙмәттәре менән файҙаланды. Улар ғилемгә нигеҙ һалыусылар. Шулай итеп, сабырлыҡтан һуң еңеү килде. Аллаға шөкөр, беҙ ундай ҡурҡыныс заманда йәшәмәйбеҙ, бөгөн йәмғиәтебеҙҙә дин тотҡан, дәғүәт иткән өсөн ҡаты язалауҙар юҡ. Ауылға ҡайтҡан һәр имам тырышып, ихласлыҡ, дөрөҫ инаныуы менән ошо юлда хеҙмәт итһә, ауырлыҡтарҙы күтәрә белһә, мотлаҡ һуңынан еңеү һәм еңеллек килер, халыҡ уның артынан эйәрер, Аллаһы Тәғәлә бәрәкәт бирер, дәрәжәһен арттырыр.

Етмеш йыл буйы динебеҙҙе бөтөрөү сәйәсәте алып барылғандан һуң, халыҡ бер көн эсендә үҙгәреп, әүлиә кеүек булып китә алмаҫ. Йүнәлеште, маҡсатты, ниәтте дөрөҫләп, хәкиҡәт юлында изгелек, яҡшылыҡ, дөрөҫлөк, сабырлыҡ менән хәрәкәт итһәк, иншаллаһ, ваҡыт үтеү менән ниндәйҙер һөҙөмтәгә ирешә алырбыҙ, тип өмөт итәм.

Күңел һуҡырлығы

Үкенескә күрә, бөгөн боронғо мәҙрәсәләрҙәге кеүек әҙәп дәрестәре уҡытылмай. Шуға ла халыҡ араһында дини наҙанлыҡ хөкөм һөрә. Ләкин нисек күҙҙәрен һәм күңелен асырға халыҡтың?

Кешенең эшләгән һәр бер хатаһы, гонаһы уның йөрәгенә бер ҡара тап булып яғыла. Кемделер рәнйетһәк, һүгенһәк, намаҙыбыҙҙы уҡымаһаҡ һәм башҡа шундай хаталарыбыҙ йыйылып китһә, ошо ҡара таптар йөрәкте тотошлайы менән ҡаплап ала. Был йөрәк зәғифләнә, кешенең күңеле һуҡырая, ҡата. Был кешегә илатырлыҡ ниндәйҙер ғибрәтле хәл тураһында һөйләһәң дә, дәлилдәр килтереп күҙенә төртөп күрһәтһәң дә, уның зәғифләнгән йөрәге бер нәмәне лә ҡабул итә алмаясаҡ. Күңел һуҡырлығы был. Ә хәләл генә ашап, иманлы мөхиттә тәрбиәләнгән сабыйға бәләкәй генә фәһемле хәл һөйләһәң дә уның йөрәгенә үтеп инер. Эйе, әлеге ваҡытта халыҡ тотошлайы менән дин әмерҙәрен үтәргә әҙер түгел.Ул әле хәләл менән харамды ла айырып өйрәнмәгән. Ә гел хәрәм ашап, хәрәм эшләп йәшәгән, ҡараға буялған йөрәктәребеҙ нисек тиҙ генә иманлы булып китә алһын? Быны тәнҡит һүҙе тип түгел, ә рухи торошобоҙға ҡарата диагноз булараҡ ҡабул итергә кәрәк. Ҡайһылыр ауыл халҡын йүнһеҙлектә, динһеҙлектә, наҙанлыҡта күпме генә ғәйепләһәк тә бер ниндәй үҙгәреш булмаҫ. Телевидение, радио, матбуғат баҫмаларында алып барылған дини тапшырыуҙар, рубрикалар динебеҙҙең бөтә тармаҡтарын яҡтыртырға тейеш. Халыҡта әле барыбер гәзиттә яҙ-

Имамдың йөрәгенә

Аллаһы Тәғәлә халыҡты

"Имам" тәрән мәғәнәле һүҙ, ул "алда баҫҡан" тигәнде аңлата. Ул намаҙ ғына уҡып, төрлө дини йолаларҙы башҡарып ҡына йөрөүсе түгел, ә халыҡ менән һәр ваҡыт тығыҙ бәйләнештә тороусы, Раббыбыҙ ҡушҡандарҙы халҡына еткереүсе, ғилем биреүсе һәм уларҙың һәммәһе өсөн дә Аллаһ ҡаршыһында яуаплы кеше. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәсәйҙә имамлыҡ институты ныҡлап етмәгән. Урта Азия, ғәрәп илдәрендә мосолман кешеһе теге йәки был проблемалар килеп тыуһа, шунда уҡ имамға мөрәжәғәт итә. Сөнки үҙен борсоған мәсьәләнең уның ярҙамында хәл ителәсәгенә ышана. Бөгөнгө көндә шулай уҡ Башҡортостанда ла был мәсьәлә бик киҫкен тора. Күптән түгел Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назаратында мәсеттәрҙең хәле, имамлыҡ торошо тикшерелеп ҡаралғандан һуң, шундай йомғаҡ яһалды: республикабыҙ мәсеттәренең 80 процентында хаҡлы ялға сыҡҡан имамдар эшләй, ә бөтә имамдарҙың 20 процентының дини ғилеме юҡ. Күптәре хатта динде бөтөнләй дөрөҫ аңламай, хата ҡарашта тора. Бөтә ошо сәбәптәр мәсеттәрҙең бикле тороуына алып килә лә инде. Улар тик йома көндәрендә йәки исем ҡушыу, никах уҡытыу кеүек ниндәйҙер йолалар башҡарылған осраҡта ғына асыла.

Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән изге Ҡөрьән китабы кешелеккә хәләл менән хәрәмде, ялған менән дөрөҫтө айырып күрһәтеүсе бер йүнәлтмә булараҡ бирелә. Тағы ла ул һәҙиә, бүләк тигән мәғәнәгә лә эйә, йәғни Ҡөрьән китабы беҙгә бүләк булып бирелгән. Халҡыбыҙҙың күбеһе уны бүлаҡ, изгелек, яҡшы ниәт булырға тейеш. Мәсет иң тәүҙә йөрәктә барлыҡҡа килергә тейеш. Әгәр ниндәйҙер ауылда намаҙ уҡыусы ике генә кеше булып та, улар ҡайҙа ла булһа урын табып, Раббыбыҙға ғибәҙәт ҡыла, ошо йүнәлештә эшмәкәрлек итә икән, уларға Аллаһы Тәғәлә үҙенең хикмәте һәм бәрәкәте менән күркәм бер мәсет бирер. Артабан инде был мәсеткә халыҡ та йыйылыр. Ихласлыҡ, кешеләрҙең теләүе, ихтыяжы кәрәк. Әгәр ниндәйҙер ауыл халҡының мәсеткә ихтыяжы булмаһа, тимәк, был ауыл өлгөрмәгән - унда төҙөлгән мәсет барыбер буш торасаҡ.

Мәсеттәрҙе һала башлаған ваҡытта уҡ йөрәктә ихласлыҡ, изгелек, яҡшы ниәт булырға тейеш. Мәсет иң тәүҙә йөрәктә барлыҡҡа килергә тейеш. Әгәр ниндәйҙер ауылда намаҙ уҡыусы ике генә кеше булып та, улар ҡайҙа ла булһа урын табып, Раббыбыҙға ғибәҙәт ҡыла, ошо йүнәлештә эшмәкәрлек итә икән, уларға Аллаһы Тәғәлә үҙенең хикмәте һәм бәрәкәте менән күркәм бер мәсет бирер. Артабан инде был мәсеткә халыҡ та йыйылыр. Ихласлыҡ, кешеләрҙең теләүе, ихтыяжы кәрәк. Әгәр ниндәйҙер ауыл халҡының мәсеткә ихтыяжы булмаһа, тимәк, был ауыл өлгөрмәгән - унда төҙөлгән мәсет барыбер буш торасаҡ.

ИХЛАСЛЫҠ БУЛҺА,

мәсеткә килтерәсәк

ылған һүҙгә, телевизорҙан яңғыраған фекергә ышаныу көслө.

Аллаға килер юлдар төрлө

Ситтән уҡып ҡайтҡан күп шәкерттәр өйҙәрҙә Ҡөрьән уҡытыу кеүек йолаларға көлөмһөрәп, кәмһетеп ҡарай. Быға кәмһетеп ҡарарға кәрәкмәй. Ҡөрьән уҡыуҙың кәрәклеге, бер-береңде ризыҡландырыу, туғандар менән аралашып йәшәү тураһында беҙ күп төрлө сығанаҡтар аша беләбеҙ. Ошо мәжлестәргә туғандар йыйыла, туғанлыҡ ебе нығына, күршеләр аралаша, кеше Ҡөрьән тыңларға өйрәнә, йәғни был табындарҙан күп төрлө тәрбиә алырға мөмкин. Икенсенән, республикабыҙ ауылдары буйлап йөрөгәндә шуға иғтибар иткәнем бар: Ҡөрьән мәжлестәре артҡан урындарҙа араҡы табындары үҙенән-үҙе кәмегән. Кеше аралашырға, ҡунаҡлашырға тейеш. Әгәр ошо юлда ҡунаҡлашмаһа, башҡа төрлө юлдар бар. Ә ул юлдарҙа шайтан ҡушылыр.

Тағы бер миҫал. Һуңғы йылдарҙа илебеҙҙең күп төбәктәрендә бер-бер артлы әүлиә ҡәберлектәре асылды, халыҡ ошо ҡәберлектәргә йөрөй, дин ғәмәлдәрен үтәй. Минеңсә, был беҙгә тыуған яғыбыҙҙы һөйөргә, ошо ерҙең ҡәҙерен белергә өйрәнеү йәһәтенән дә бик яҡшы. Әүлиә ҡәберҙәренә барырға ярамай, был ширк, диндән сығыу, тип әйтеүселәр яңылыша. Мәҫәлән, мин ҡайһы бер әүлиә ҡәберлектәренә барҙым, ләкин унда ҡәбергә табыныу йолаһын күрмәнем. Аллаһы Тәғәлә беҙгә юҡҡа ғына ике ҡолаҡ, ике күҙ бирмәгән: ялғанды дөрөҫлөктән айыра белергә кәрәк. Был изге урындарға ялбарыу өсөн барыу, әлбиттә, үтә яҙыҡ эш. Беҙҙең бөтә төр үтенес, һорау, ялбарыуҙарыбыҙ фәҡәт берҙән-бер булған Аллаһы Тәғәләгә генә йүнәлтелергә тейеш.

Аллаһы Тәғәлә бер ишекте асып ингән кешегә башҡа ишектәргә инеүҙе лә еңелләштерә. Кеше таныған әйбере аша яйлап күнегә, бер төрлө әҙәпкә, ҡағиҙәгә өйрәнә. Уйламаған ерҙән шул кеше үҙе һиңә аҡыллы фекерҙәр һөйләй башлауы ихтимал. Аллаһы Тәғәләгә илтә торған юлдар күп төрлө - бөтә кешене бер һыҙыҡҡа теҙергә ярамай. Кеше дингә сәнғәт йәки фән, ауырлыҡтар йәки йолалар аша ла килергә мөмкин. Кемдер әстәлеген белмәйенсә, формаһын ғына ҡабул иткәндән һуң, әлек күрмәгән ишектәрҙе лә күрә башлай. Ә артабан тап үҙенә тейешле һуҡмаҡты һайлап ала. Етмеш кеше бар икән, һәр береһенең мотлаҡ үҙ юлы, үҙ һуҡмағы булыр.

Яңылышыуҙар булмаһын өсөн…

Аллаһҡа килеү юлдары күп төрлө, тинек. Беҙҙең йүнәлеш кенә дөрөҫ, ҡалғандары яңылыш, тигән фекер төптө хата. Шулай ҙа хаталар булһа, тәкәбберләнмәй генә белергә, таҙартырға, таҙаланырға һәм бер кемде лә дошман күрмәҫкә кәрәк. Йәштәр дингә килгән ваҡытта күпселектә агрессив була. Беренсе тапҡыр ураҙа тотоусылар ҙа күп осраҡта нәфрәтләнеп йөрөй, сөнки хәҡиҡәт юлына баҫтырмаҫ өсөн шайтан кешене төрткөләп кенә тора. Улар әле имандан нур алып өйрәнмәгән. Әле генә намаҙға баҫып, дин ғилемен өйрәнә башлаған һәр кем диндә бөтәһе лә ап-аҡ, тап-таҙа, яҡшы, ә унан ситтәгеһе бөтәһе лә шайтан эше, тип уйлай һәм башҡаларҙы ла шайтан тоҙағынан ҡотҡарыу, үҙенең артынан эйәртеү маҡсатында фекерҙәрен ҡыҫҡырып иҫбат итә башлай. Шул ваҡытта дингә яңы килгән кешене хуплап алырлыҡ, уға һәр ваҡыт ҡаршы килмәй, тыныс ҡына аҡыл бирерлек абруйлы, дәрәжәле кешеләребеҙ юҡ. Күп осраҡта беҙ агрессия күрһәткән кешене баҫабыҙ, уны әллә ниндәй сит юлға төшөүҙә ғәйепләйбеҙ. Шулай итеп, уны үҙебеҙҙән ситләштерәбеҙ. Йәләлетдин Румиҙың бер әҫәрендә өс кеше осраша һәм бер емеште төрлөһө төрлө телдә атап, аңлаша алмай, бәхәсләшеп китә. Бөгөнгө төрлө йүнәлештәрҙә йөрөгән йәштәр менән дә шулай килеп сыға: исемдәрен үҙҙәре ҡуйып, бер үк нәмә тураһында һөйләйҙәр һәм һуғышҡа тиклем барып етәләр. Былар, әлбиттә, дин тәғлимәтен ныҡлап белмәүҙән, наҙанлыҡтан килеп сыға. Ә уҡытыусыларыбыҙ, остаздарыбыҙ юҡ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

Ислам академияһы төҙөлөрмө?

Ниндәй генә йүнәлештә булмаһын, уҡыу йорто барлыҡҡа килеүе үҙе үк яҡшы күренеш. Бигерәк тә Ислам университеты асылыуы баһалап бөткөһөҙ. Иң мөһиме, был дини белем алырға теләүсе йәштәргә үҙебеҙҙең республикала уҡыу мөмкинлеге бирә. Иншаллаһ, киләсәктә ғилемле, динле, аҡыллы, фекерле йәштәребеҙ артыр. Шул уҡ ваҡытта, үҙебеҙҙә мөмкинлектәр асылғас, ғилем эстәп сит илдәргә йөрөмәһәк тә була, тигән фекер менән килешмәҫ инем. Барымы, тырышлығы, ынтылышы булған йәштәрҙе сит илдәргә ебәреп уҡытыу ҙа яҡшы булыр. Боронғо әҙиптәрҙең тормош юлын өйрәнһәк, уларҙың һәр береһе төрлө-төрлө мәҙрәсәләрҙә уҡып сыҡҡан, береһен тамамлағас, икенсеһенә юл тотҡан. Эш уҡыу йортоноң ҙурлығында түгел, уларҙың һәр береһендә үҙенсә бер ғилем сығанағы бар. Республикабыҙҙа Ислам академияһының төҙөлөүе, бер яҡтан, халыҡҡа ғилем биреү йәһәтенән яҡшы булһа, икенсе яҡтан, ислам диненә ҡарата етәкселәрҙең иғтибарын да арттыра. Мәҫәлән, ошо яңылыҡ сыҡҡандан һуң район етәкселәренең дә дингә ҡарашы үҙгәрҙе, үҙҙәрендә мәсет һалдырыу, уларға халыҡты йөрөтөү буйынса эштәр алып бара башланы. Юғиһә, быға тиклем беҙҙә дин тотҡан кеше гел көлкөлө образ булып һүрәтләнә килде. Башҡорт дәүләт академия драма театрында ҡуйылған "Мулла" спектакле генә был образды бер ни тиклем күтәреп ебәрҙе. Әйткәндәй, "Ҡара йөҙҙәр" әҫәренән сығып, Мәжит Ғафуриҙы күптәр дингә ҡаршы яҙған әҙип булараҡ ҡабул итә. Ә бына минең ҡарашҡа ул иң динле яҙыусыларҙың береһе. Нәҡ "Ҡара йөҙҙәр" повесы менән ул динде түгел, ә уны бысратыусы, юҡҡа сығарыусыларҙы фаш иткән һәм шуның менән динебеҙҙе таҙартҡан, күтәргән. Халыҡ үҙенең имамын, дин кешеләрен хөрмәт итһен өсөн иң тәүҙә әҙәбиәттә лә, мәҙәниәттә лә, сәнғәттә лә дин кешеһенең образын эҙмә-эҙлекле күтәрергә кәрәк.

Республикабыҙҙа абруйлы Ислам университеты студенттары менән яҡшы аралашып йөрөйөм. Үкенескә күрә, был университетта белем алыусы студенттар араһында башҡорттар бик әҙ. Ә бына шуныһы һоҡланыу уята: Һарытау, Пенза һәм башҡа сит өлкәләрҙән килгән егеттәрҙең ата-әсәләре ҙур эшҡыуар, директор, етәксе, шул ерҙәге иң абруйлы кешеләр булһа ла, был егеттәр мәктәпте гел яҡшы билдәләргә тамамлаһа ла, улар ниндәйҙер техник университетҡа ҡарағанда, Ислам йүнәлешен өҫтөн күргән. Ә беҙҙең ауылдарҙа бөтөнләй кире ҡараш күҙәтелә: уҡырға инә алмаған балаһына ата-әсәһе: "Балам, һинән башҡа бер кем дә сыҡмаҫ, муллалыҡҡа уҡы ла ҡуй", - тип кәңәш бирә. Ислам дине һантыйҙар дине түгел, ул иң үҫешкәндәр, ғилемлеләр, уйлай белгәндәр, юғары мәҙәниәтлеләр дине. Бына был ҡараш беҙҙең ауылдарҙа әле бөтөнләй юҡ, динебеҙҙең ни тиклем бөйөк бер ғилем икәнлеге халҡыбыҙҙың үҙаңына һаман барып етмәй.

Дини дәрестәр уҡытыла башлаясаҡ…

Мәктәптәргә дини дәрестәр индереү тураһында һүҙ сыҡҡас, халыҡта ҡаршылыҡлы фекерҙәр тыуғайны. Күптәр әлеге дәрестәр рухи ҡиммәттәре формалашып етмәгән балалар араһында христиан динен пропагандалауға ҡайтып ҡаласаҡ, тигән шик белдерҙе. Дин әһелдәре иһә дини тәрбиә һабаҡтарының кәрәклеген төрлө дәлилдәр менән иҫбатларға кереште. Бына, ниһайәт, был мәсьәлә дәүләт дәрәжәһендә хәл ителде. Был фән мәжбүри программаға инмәй һәм унан имтихан биреү ҙә әлегә күҙ уңында тотолмай. Әммә был башланғысты барлыҡ традицион конфессиялар ҙа хуплаған. Әлегә дини-әхлаҡи тәрбиә дәрестәре эксперимент рәүешендә уҡытыласаҡ. Уҡыусылар традицион диндәрҙең береһен (православие, ислам һәм иудаизм) йәки барлыҡ төр диндәр тураһында мәғлүмәт биреүсе курсты һайларға мөмкин. Шулай уҡ өсөнсө вариант та тәҡдим ителә - дини ҡараштары билдәләнмәгән балалар этика дәрестәренә өҫтөнлөк бирә ала. Дин дәрестәрен мәктәптәрҙә дин әһелдәре түгел, ә уҡытыусылар уҡытырға тейешлеге лә әйтелде. Ошондай ихтыяж тыуған икән, уҡытыусылары ла табылыр. Тиҙ арала яңы предметтан тейешле белем бирергә һәләтле мөғәллимдәр һәм дәреслектәр әҙерләүгә керешәсәктәр.

Яңы индерелгән фән буйынса уҡыусылар ҡайһы динде өйрәнеүҙе үҙҙәре һайларға тейеш. Бына был йәһәттән, бәлки, ҡайһы бер проблемалар килеп тыуыуы ихтимал. Күп нәмә ғаиләнән килә. Туған телде уҡытыу менән килеп тыуған проблемалар динде һайлағанда ла ҡабатланыуы бар. Шуға һәр мосолман балаһы үҙ динен өйрәнергә бурыслы.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы, милләтебеҙ ғорурлығы Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең Хушлашыу хатында милләтебеҙгә: "Динегеҙҙе, телегеҙҙе һаҡлағыҙ", - тип әйтеп ҡалдырған. Дин - ул кешенең рухи һәм әхлаҡи үҫешен тәьмин итә, динле кеше - юллы кеше, динһеҙ кеше - юлһыҙ кеше, шулай уҡ динле милләт - юллы милләт, динһеҙ милләт - юлһыҙ милләт. Изге китабыбыҙ Ҡөрьәндә лә: "Минең ҡушҡандарымды үтәмәһәгеҙ, Мин һеҙҙе башҡа халыҡтар менән алмаштырырмын", - тип яҙылған. Иншаллаһ, милләтебеҙ үҙенең асылынан, диненән яҙмай хәҡиҡәт юлынан атлаһын, дөрөҫтө ялғандан, насарҙы яҡшынан айыра белһен.

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.

Һарытау, Пенза һәм башҡа сит өлкәләрҙән килгән егеттәрҙең ата-әсәләре ҙур эшҡыуар, директор, етәксе, шул ерҙәге иң абруйлы кешеләр булһа ла, был егеттәр мәктәпте гел яҡшы билдәләргә тамамлаһа ла, улар ниндәйҙер техник университетҡа ҡарағанда, Ислам йүнәлешен өҫтөн күргән. Ә беҙҙең ауылдарҙа бөтөнләй кире ҡараш күҙәтелә: уҡырға инә алмаған балаһына ата-әсәһе: "Балам, һинән башҡа бер кем дә сыҡмаҫ, муллалыҡҡа уҡы ла ҡуй", - тип кәңәш бирә. Ислам дине һантыйҙар дине түгел, ул иң үҫешкәндәр, ғилемлеләр, уйлай белгәндәр, юғары мәҙәниәтлеләр дине. Бына был ҡараш беҙҙең ауылдарҙа әле бөтөнләй юҡ, динебеҙҙең ни тиклем бөйөк бер ғилем икәнлеге халҡыбыҙҙың үҙаңына һаман барып етмәй.

✓ ***Шул вақытта Ғариф менән Шәүрә нишләрҙәр?.. Ауыл халҡы уларҙы һәләк итеүе лә бар бит!.. Йәштәр өсөн Мөслимәнең йөрәге һыҙланы. Эйе, Шәүрә килен менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеп алырға кәрәк.***

Шәүрә

(Ҡисса)

Хәлил Һөйөндәков

Йәйләүгә күсеп килгәндән алып бер-нисә көн дә үтеп китте. Бында ла һәр кем үҙ эше менән булышты. Кәлимулла ыштан балаҡтарын төйөп балыҡ һөҙҙө. Кескәй Мөхәммәт күбеһенсә уның тирәһендә уралғылаған. Йыбырҙашҡан селбәрәләрҙе күреп, ҡулдарын сәпәкәйләп, ихлас күңелдән ҡыуанды ул. Шәүрә күпселектә ҡаҙан тирәһендә йөрөнө. Бешеренергә бигерәк тә ярата ул. Ҡайһы саҡта Сәбиләгә бейә, һыйыр һауыша. Ә ҡымыҙҙы Мөслимә үҙе яһаны. Бер төн эсендә әллә нисә мәртәбә уянып, йыбанмайынса, күнәсектәге ҡымыҙҙы ғыжлатып бешеп ала. "Шулайтмайынса, ҡымыҙ тигәнең айран ғына була ул", ти Мөслимә. Кәлимулла мыжый башлағас, әсәһе уны үҙенең тирмәһенә алды.

Шәүрә аулаҡта үҙе бер тирмәлә йоҡланы. Кәлимулланы үҙе янында ҡалырға өгөтләп торманы. Ғариф та үҙенең ситтәрәк торған тирмәһендә яңғыҙы төнәп йөрөнө. Мөнәсәбәттәрен Мөслимәнең һиҙеп ҡалыуынан шикләнделәр. Бер-береһен уйлап, икеһе ике тирмәлә төндәр буйы йоҡоһоҙ борғоланып яттылар. Ни өсөн Мөслимә тирмәләрҙе шулай ҡорҙорғанын аңламайҙармы икән ни улар?

Бер көндө, кискә табан, Мөслимә ағас туҫтаҡҡа әсе ҡымыҙ һалып, Шәүрәне үҙ тирмәһенә саҡырып алды.

- Бар әле, килен, ҡайныңа ҡымыҙ алып барып эсерсе. Моғайын, ҡырҙан һыуһап ҡайтҡандыр, - тине ул . - Йә үҙе минең тирмәгә инергә ҡурҡа әллә...

- Инергә рөхсәтме, ҡайным? - тине мөлдөрәмә ҡымыҙ тулы һауыт тотҡан Шәүрә Ғарифтың тирмә ауыҙы янына килгәс.

- Ә, Шәүрә килен, әйҙүк, рәхим ит, - тип яҡты йөҙ менән ихлас ҡаршы алды уны Ғариф.

- Ҡәйнәм һиңә ҡымыҙ ебәрҙе, - Шәүрә бер аҙ оялғандай, яулыҡ осо менән битен яртылаш йәшерҙе. - Һыуһағандыр ҡайның, ти.

- Һыуһамаған ҡайҙа инде ул, килен, үтә лә һыуһаным, - тине Ғариф уға мут йылмайып. Иҙәнгә түшәлгән күпмә өҫтөндә ҡаҡ салҡанан ятҡан еренән ҡалҡынып ултырҙы. - Ҡана, килен...

Ғариф үҙенә һуҙылған туҫтаҡты алды һәм Шәүрәнән күҙҙәрен алмайынса, бер тынала ҡымыҙҙы эсеп бөттө. Бушаған һауытты киленә кире биргән ыңғайға уның биленән кинәт кенә ике ҡуллап тотоп алды. Тағы ла унын күҙҙәренә ҡарап, тын ғына йырлап ебәрҙе:

Шәүрә килен, кейгән еләнеңдең
Итәк осҡайҙары суғы оҙон...

Сәсәнлек һәләтенә эйә булған Шәүрә, тирә-яғына күҙ ташлай һалып алды ла, Ғарифтың йырын өҙмәйенсә генә дауам итте:

Көндөҙҙәрен йөҙөм, ай, ояла.
Һөйләшербеҙ, ҡайным, төн оҙон.

- Ни ишетәм мин, килен, - тине Ғариф тулҡынланып. - Тимәк, беҙ бөгөн төнөн осрашып һөйләшә аласаҡбыҙ?!

- Ҡәйнәм һиҙеп ҡалмаһа...

- Беләһеңме, Шәүрәкәй, минең еңгәмдең ниндәй яҡшы кеше икәнен! Ул беҙҙең аралағы мөнәсәбәтте әллә ҡасандан уҡ һиҙеп йөрөй, әммә үҙе белмәмешкә һалыша. Миңә ошо тирмәне лә айырым урынға, тик һинең менән осрашып йөрөй алһын өсөн генә яһатҡан, моғайын. Һине лә бөгөн ул миңә юрый ебәргәндер. Һәр хәлдә, минең күңелем шулай тоя. Бисәм булып һаналһа ла, ысында иһә, ул миңә еңгәй генә бит. Беҙ быны икебеҙ генә беләбеҙ. Ир-ҡатын булып беҙ еңгәм менән бер ваҡытта ла йәшәмәнек, Шәүрәкәй!

- Ысынлаптамы, ҡайным?

- Ысынлап та, йәнем! - Ғариф Шәүрәне үҙенә яҡыныраҡ тартты.

- Ҡуйсы, ҡайным, мин хәҙер китәйем инде, - тип Шәүрә, еңелсә генә этенеп, Ғарифтың ҡосағынан ысҡынды.

- Улайһа, төнөн килерһеңме, Шәүрәкәй?

- Килермен, ҡайным.

- Вәғәҙәме? - тине ҡайныһы.

- Вәғәҙә, - тине килене һәм тирмәнән сығып йүгерҙе.

Киске аштан һуң Ғариф үҙенә урын тапмайса, унда-бында йөрөнө, ятып та ҡараны, ләкин бер ҙә тыныслана алманы. Янына иң яҡын күргән кешеһе килер кисте нисек тыныслаһын инде? Бөгөн уға Шәүрәһе киләсәк! Ошо төн өсөн Ғариф йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Хатта айҙы һәм ҡояшты, йондоҙҙарҙы алып бирәсәк ул бөгөн Шәүрәкәйенә...

Төн уртаһы етеп, тамам ҡараңғы төшкәс, тирмә янында үлән ҡыштырҙағандай булды. Ғарифтың уныҡыҙ ҙа урынынан сығып барған йөрәге дөпөлдәп, тағы ла нығыраҡ тибә башланы. Тирмә ишеген ҡайырып ҡараны. Ишек янына туҡал кәҙә килеп ятҡан икән. Ғариф уфтанып ҡуйҙы. Өҙөлөп көткәндә шундайын да оҙаҡ үтә икән был ваҡыт тигәндәре... Ике ҡатлап түшәлгән күпмә өҫтөнә ятып, төрлө татлы уйҙар уйлай-уйлай, үҙенең бәхетен көтә башланы. Шәүрәһен тәү күргән ваҡытты иҫләне. Унан ташҡын һыуҙан нисек күнәген алып сығып, тәүге тапҡыр һөйгәненең күҙҙәренә туя алмайынса ҡарағанын күҙ алдына килтерҙе... Тәрәнүҙәк... Шундай ләззәтле уйҙарына бирелеп, нисек күҙҙәре йомолоп йоҡоға киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды Ғариф.

Ниҙер рәхәтләндереп сикәһенә тейгәнгә уянып китте ул. Ҡараңғыла битенән иркәләп һыйпаған ҡулдарҙы ҡапшап тотоп алды.

- Һинме, был, Шәүрәкәй? - тине тулҡынланып.

- Эйе, мин, - тине Шәүрә.

- Килдеңме, йәнем? - тине Ғариф уны үҙенә тартып.

- Килдем, бәғрем, - тине Шәүрә ҡаршылашмай.

- Донъяла иң гүзәлдәрҙән дә гүзәле - һин, Шәүрәкәй! - тип шыбырҙаны Ғариф уның ҡолағына.

- Һин дә, йәнем!

- Ер йөҙөндә иң затлыһы - һин, Шәүрәкәй!

- Һин дә, бәғрем!

- Донъяла иң татлыһы - һин, Шәүрәкәй! - Ғариф уның ирендәренән үпте.

Шәүрә башҡа һүҙ әйтә алманы, хәлһеҙләнеп, Ғарифтың түшәгенә ауҙы...

Ошо төндә улар Ер йөҙөндәге иң бәхетле кешеләр ине. Икеһе лә үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр иң ләззәтле тойғолар кисерҙе, бер-береһен һөйөп туя алманы.

Шәүрә таң беленгәс кенә Ғарифының ҡосағынан көскә айырылып, үҙенең тирмәһенә ҡайтып китте. Төндө йоҡоһоҙ үткәреүенә ҡарамаҫтан, уның йөҙөндә һүнмәҫ шатлыҡ балҡый ине. Ул бөгөн йән һөйгәне менән ҡауышты! Шунан да олораҡ бәхет булыуы мөмкинме һуң?! Ниндәй ҙур бәхет ул - һөйөү һәм һөйөлөү!

Ул йоҡларға ятып та торманы, бер аҙ иртәрәк булһа ла, күнәктәрен алып, һыйырҙарҙы һаяа башланы. Иртәнге тәһәрәткә сыҡҡан Мөслимә:

- Ҡалай иртә торғанһың, килен. Әҙерәк йоҡлай бирһәңсе... - тине.

- Йоҡлап булмайсы, ҡәйнәм. Хәҙер таң да атып килә инде...

- Һә-әй, килен, һинең кеүек килен саҡта мин тағы ла бер аҙ серем итеп алырға ине, таң атмайыраҡ торһон ине, тип теләй инем. Ә һин йоҡлай алмайым, тигән булаһың...

Киленененең ни өсөн "йоҡлай алмағанын" Мөслимә, әлбиттә, һиҙенә ине. Шәүрә менән Ғарифтың ҡараштары бергә осрашҡан сағын да күргеләгәне бар Мөслимәнең. Ул ҡараштарҙа ҡасандыр йәш ваҡытында Мөслимәгә лә таныш булған, һис кемден дә йәшереп булмай торған һөйөү сатҡылары бар... "Эй, хоҙайым, шул Шәүрәгә ҡәйнә булыу урынына, килендәш кенә булып, серләшеп кенә ултыраһы ине лә бит", тип уйланы Мөслимә.

* * *

Мөмкинлек булған һайын Шәүрә менән Ғариф осраша торҙолар. Улар хәҙер төндә генә түгел, ҡайһы саҡтарҙа көндөҙ ҙә осраша. Уларҙын бер-береһеҙ йәшәй алмағандарын Сабир менән Сәбилә лә асыҡ белә ине. Бер көн Кәлимулла әсәһенә ҡайтып, үҙенең сираттағы мәҙәк хәбәрен һөйләй һалды:

- Әсәй, бая атайымдың тирмәһендә атай менән киленең һуғыштылар.

- Бәй, нисек һуғышһындар ти?

- Эйе, ысынлап та һуғыштылар, - тине Кәлимулла етди төҫ менән. - Атайым уның ауыҙын тешләгән дә, ысҡындырмай. Әлдә мин барып индем. Юғиһә, ул киленеңдең берәй ерен имгәтеүе бар ине...

- Ярай, улым, уға иғтибар бирмә, - тигән булды әсәһе. - Атайың ысынлап түгел, ә шаяртып ҡына тешләшкән. Моғайын, Шәүрә килен уға асыуланмағандыр.

- Асыуланмаған ҡайҙа ул! Киленең атайыма бик ныҡ асыуланды. Асыуынан, үҙе лә атайымды ике ҡуллап ҡыҫып, ныҡ итеп тешләне. Мине күргәс, оялышынан тышҡа сығып йүгерҙе.

- Ярар, улым, ярашырҙар әле. - Мөслимә улының башынан һыйпаны.

- Ярай әле, әсәй, мин һинең менән йоҡлайым, эйе бит. Юғиһә, киленең мине лә тешләп бөткән булыр ине. - Кәлимулла әсәһенә һырынды.

- Шулай шул, улым...

Мөслимә уйға батты. Ни хәл итһен инде, меҫкен Шәүрә килен дә, Мөслимәнең үҙе кеүек, иҫке ғөрөф-ғәҙәттәрҙең меңәрләгән ҡорбандарының береһе бит... Үҙенең сәскәләй йәш сағын иҫләне. Бөтә яҡын-тирәлә иң һылыу ҡыҙ тигән даны сыҡҡан Мөслимәнең ата-әсәһе, уға ҡалһа, иң ярлы кешеләр ине. Күрше ауылдан Мөрсәлим байҙың улы Йәрмөхәммәт Мөслимә өсөн йән атып йөрөгәйне. Ул ғына ла түгел, Мөслимә лә уны өҙөлөп ярата ине. Хатта уңайын табып, ҡауышырға һүҙ ҡуйышып та ҡуйғайнылар. Әммә, ҙур үкенескә ҡаршы, Йәрмөхәммәттең туғандары, айырыуса ата-әсәһе, уларҙың никахына ҡырҡа ҡаршы булды. Уға, үҙ ихтыярынан тыш, ултырған ҡарт ҡыҙҙы алып бирҙеләр. Йәрмөхәммәттән күпкә оло булған кәләшенең ата-әсәләре бик бай кешеләр ине шул... Ҡоро һылыулығың булыу менәнме... Ҡайғыһынан иланы-иланы ла, күңеле һөймәһә лә, Ғәлләмитдин килеп һораҡҡас та, ҡаршылашып тормайынса, шуға сыҡты ла китте. Бәхет бер булмаһа - булмай икән... Ғәлләмдән сирле баланан башҡа рәте булманы. Етмәһә, әле ҡартайып та өлгөрмәгән көйө гүр эйәһе булды...

...Берҙән-бер туғаны Шәрифйән дә бик йәшләй мәрхүм булғас, исмаһам, яңғыҙ ҡалған Шәүрә килене бәхетле булһа ине, тип теләй ине Мөслимә. Эй, Шәүрә... Һуңғы осорҙа киленененең йыш ҡына әсе ҡорот, ҡуҙғалаҡ һымаҡ нәмәләр ашай башлағаны уның иғтибарынан ситтә ҡалманы. Эйе, Шәүрәнең йөккә уҙыуы ла бик ихтимал... Килене ауырға ҡала күрһә, әлбиттә, тиҙҙән бар ауылға мәғлүм буласаҡ. Кәлимулланан ауырлы тип уйламаҫтар бит? Шул ваҡытта Ғариф менән Шәүрә нишләрҙәр?.. Ауыл халҡы уларҙы һәләк итеүе лә бар бит!.. Йәштәр өсөн Мөслимәнең йөрәге һыҙланы. Эйе, һис кисекмәҫтән, йәйләү бөтмәҫ элек, Шәүрә килен менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеп алырға кәрәк. Ниндәй ҙә булһа берәй сара уйлап табырға... Һис кисекмәҫтән...

* * *

Бер көн Мөслимә Шәүрәне үҙенең тирмәһенә саҡырып алды. Килене менән сәй эскән арала, бик тыныс ҡиәфәттә, үҙен байтаҡтан борсоп торған һорауын бирҙе:

- Аулаҡта ғына үҙеңдән һорайым тип уйлап йөрөй инем әле, килен. Үҙ тәнеңдә бер ниндәй ҙә үҙгәреш тойғоламайһыңмы?

- Ниңә улай тип һорайһың, ҡәйнәм? - тип һорауға һорау биргән Шәүрәнең биттәре яңы ҡалҡып килгән ҡояштай ҡып-ҡыҙыл булды.

- Ниңә тип ни, мин бит - донъя күргән кеше, килен. Барыһын да һиҙеп йөрөйөм. Һинең әсеһерәп йөрөгәнеңде лә күрәм...

Шәүрә тамам ҡаушап төштө, ҡәйнәһенә ни әйтергә лә белмәне. Оялышынан ике бите уттай янды, тәндәре зымырҙап, эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Әллә ҡәйнәһе ғауға күтәрергә уйланымы?

Мөслимә һаман да әлеге тыныслығы менән дауам итте:

- Нисек кенә йәшерергә тырышһаң да, беҙ ҡапсыҡта ятмай ул. Ғариф ҡәйнеш менән үҙ-ара мөнәсәбәтегеҙҙе әллә ҡасандан уҡ һиҙеп-белеп йөрөйөм. Ошоғаса күрмәмешкә һалышап йөрөһәм дә, хәҙер мәсьәләне уртаға һалып хәл итергә ваҡыт етте, килен. Иң беренсе нәүбәттә шуны әйткем килә: мин һеҙҙең икегеҙҙе лә ошо донъяла бәхетле итеп күрергә теләйем. Һеҙ кеше-маҙарға күренмәйенсә осраша алһын өсөн мин быйыл һеҙҙе ошо йәйләүгә алып килдем. Ғариф ҡәйнешкә лә тирмәне бынан алыҫыраҡ итеп, айырым урынға ҡорҙорттом. Бәлки, киленкәйем, минең ошо эштәрем һиңә бик сәйер ҙә тойолор, әммә мин ихлас күңел менән, йөрәгем һәм намыҫым бойорғанды эшләнем. Һеҙ минән һис тә шикләнмәгеҙ. Ғариф ҡәйнешкә мин ғүмер буйы тик еңгә генә булып ҡала-

саҡмын. Аллаһ бойорһа, һеҙҙең Ғариф менән бергә булыуығыҙға мөмкин тиклем булышлыҡ та итәсәкмен. Әле бына һин бәпәйгә уҙғанһыңдыр, тигән уй мине борсой башланы, килен. - Мөслимә Шәүрәне ҡосаҡлап алды. Шәүрә хас та бала һымаҡ, үкһей-үкһей ҡәйнәһенең ҡосағына һыйынды.

- Эй, ҡәйнәм! Әүлиәһеңдер һин! Һинең һымаҡ яҡшы кешеләр юҡтыр был донъяла. Эйе, ҡәйнәм, Ғариф менән беҙ бер-беребеҙҙе ысынлап та өҙөлөп яратабыҙ. Ни хәлдәр генә итәйек икән һуң? Етмәһә, мин, үҙең әйтмешләй, ауырлымын, буғай, - тине Шәүрә ҡәйнәһенең күкрәгенә йәшкә мансылған битен терәп. Мөслимә лә күҙ йәштәрен тыя алманы...

- Беҙгә был көйө ауылға ҡайтырға ярамай, килен, - тине Мөслимә бер аҙ тынысланғас. - Әйҙәгеҙ, бөгөн кискә барыбыҙ ҙа йыйылып кәңәшләшәйек. Бәлки, берәй нәмәһен уйлап табырбыҙ. Сабирға әйт, көтөүҙән һимеҙерәгенән ҡарап, берәй тәкәне һуйһын. Сәбилә килен менән ашҡа ла килһендәр...

Киске ашҡа барыһы ла Мөслимәнең тирмәһенә йыйылды. Байбисә ҡунаҡтарын ҡыҫтап-ҡыҫтап тәмле бишбармаҡ менән һыйланы. Бишбармаҡ ашалып бөткәс, сөм түҫтәҡты бер-береһенә сиратлап күсереп, ҡоротло һурпа эстеләр. Һурпа эскәндән һуң, хужабикә һәр береһен йөрәктәргә ятып торған әсе ҡымыҙ менән һыйларға тотондо. Бер аҙ ҡымыҙ эсеп алғас, Мөслимә моңһоу көйгә һалып йырлап ебәрҙе:

Йүгереп кәнә йөрәп үрттәр һалдым
Ирәндеккәй тауҙың үренә.
Үткән генә ғүмер зая үтте,
Бәхет бирһен ҡалған ғүмергә...

Уның йырын барыһы ла тын да алмай тыңланы. Иғтибарлыраҡтары сыра яҡтыһында Ғарифтың күҙҙәренә йәш килгәнен дә байҡағандыр, моғайын. Аш мәжлесендә, күбеһенсә, Мөслимә үҙе һөйләне. Һүҙҙәр мал-тыуар хаҡында, бесән мәле яҡынлашыуы, ғөмүмән, көндәлек хужалыҡ эштәр тураһында барҙы. Унан көн торошона күсте. Уға ара-тирә Сабир менән Сәбилә һүҙ ҡушҡыланы. Аш мәлендәге һис тә әһәмиәте булмаған был һөйләшеүҙәргә Шәүрә менән Ғариф ҡушылманы, тиерлек. Ҡыйыуһыҙ бала-саға һымаҡ, улар бер-береһенә лә, башҡаларға ла күтәрелеп ҡарарға, йә һүҙ ҡушырға баҙнат итмәй ултырҙылар. Дөрөҫөрәге, башҡаларҙан улар бик ныҡ ояла ине.

Ҡунаҡтар туйып, башҡа һөйләшер һүҙҙәр ҙә ҡалмағас, барыһы ла тик Мөслимәгә төбәлде. Хәҙер ул ни әйтәсәген барыһы ла тиерлек һиҙә ине инде. Шуға күрә, ҡунаҡтар, бер аҙ эске көсөргәнеш, тулҡынланыу кисереп, хужабикәнең ни әйтерен көттө. Тик ситтә кескәй Мөхәммәтте ҡытыҡлап, көлдөрөп уйнатҡан Кәлимулла өсөн генә был табындың башҡаса әһәмиәте ҡалманы.

- Балаларым, - тип әсәләрсә һүҙ башланы етди төҫ алған Мөслимә Ғариф менән Шәүрәгә ҡарап, - һеҙҙе бәхетле итер өсөн ни генә эшләргә икән миңә? Үкенескә ҡаршы, беҙҙең борондан килгән ғөрөф-ғәҙәттәрҙең талабы буйынса, һеҙҙең бер нисек тә, бер ҡасан да бергә булырға хоҡуғығыҙ юҡ...

Мәсьәләнең тап елегенән тотоп башлаған Мөслимәнең был һүҙҙәре иң тәүҙә уны тыңлап ултырыусыларҙың йәндәренә үтеп инеп, уларҙың йөрәген йыш-йыш тибергә мәжбүр итте. Бер ни ҙә өндәшмәй, хужабикәнең артабан ни әйтерен көттөләр. Ни өсөндөр, улар хәҙерге мәлдә Мөслимәне үҙҙәренең ҡотҡарыусыһы, юл күрһәтеүсеһе итеп күрҙе, унан ниҙер өмөт итте.

- Һеҙҙең бер-берегеҙҙән башҡа йәшәй алмағанығыҙҙы мин аңлап торам. Мин генә лә түгел, Сабир менән Сәбилә лә был хаҡта белеүҙәренә шигем юҡ... Бәхетебеҙгә күрә, бына ошо кешеләрҙән башҡа бер кемгә лә был хәл мәғлүм түгел. Әгәр ҙә ауылда был турала белеп ҡалһалар, шәриғәт хөкөмө буйынса, һеҙҙе зинасылыҡта ғәйепләп, ошо яҡты донъяла йәшәүҙән мәхрүм итәсәктәр. Ә һеҙ, балаларым, әле генә тормоштоң тәмен татып йәшәй башлаған кешеләр, - Мөслимә күҙҙәренә мөлдөрәп сыҡҡан йәшен яулыҡ осо менән һөртөп алды. - Аллаһы Тәғәлә үҙҙәренә насип ҡылған саф мөхәббәтте кешеләр ниндәйҙер саралар менән һаҡлап алып ҡалырға тейеш. Бына шуның өсөн кәңәшкә йыйҙым да инде мин һеҙҙе.

Барыһы ла тынып ҡалды. Ғариф менән Шәүрәнең яҙмышына һис тә битараф булмаған Сәбилә бер аҙҙан:

- Мөслимә еңгә, әгәр ҙә Сәмиғулла ҡайнағаға барып кәңәшләшеп ҡарағанда, нисегерәк булыр икән? Ғариф ҡайнағаның атаһы бит ул, бәлки, ғәзиз улының хәлен аңлар... - тигән булды.

- Юҡ, килен, ҡайныма кәңәш итеү тураһында уйларға ла ярамай. Мин бит уны бик яҡшы беләм. Ул үҙе иң беренсе булып ауыл халҡынан балаларын хөкөмгә тарттырыуҙа талап итәсәк, - тине Мөслимә.

- Мин Ғариф менән Шәүрәгә бик алыҫҡа - Һаҡмар түбәненә, был тирәләге кеше күрмәгән ерҙәргә китергә кәңәш итәм, - тине Сабир бер аҙ уйланып ултырғандан һуң. - Башҡаса бер ниндәй ҙә сара күрмәйем. Әгәр мәсьәләне шулай хәл итһәк, үҙем малдарын ҡыуып алып барышыр инем. Тик уларҙың ҡайһы яҡҡа киткәнен һис кем белергә тейеш түгел. Быны барыбыҙ ҙа оло сер итеп һәҡларға тейешбеҙ. Сәмиғулла олатай менән Мәҙинә инәйгә "ҡасып киткәндәр", тиербеҙ ҙә ҡуйырбыҙ.

Был тәҡдим Мөслимәгә оҡшаны. Ысынлап та, башҡа сара юҡ ине. Ғариф бер ни ҙә өндәшмәй, уйланып ултырҙы. Әсәһе йәл ине уға. Ғүмер буйы атаһына бер һүҙһеҙ буйһоноп йәшәгән әсәһен бигерәк ҡыҙғанды ул. Шул уҡ ваҡытта Шәүрәһе менән бәхетле тормош ҡорорға хыяллана ине. "Йә инде, Ғариф, - тип үҙ-үҙен тынысландырырға тырышты ул, - әсә кеше аңлар әле. Әсә күңеле сикһеҙ киң бит ул, әсә кеше бар нәмәне лә кисерә... Үҙең тураһында ғына ла түгел, Шәүрәнде, уның ҡорһағында ятҡан буласаҡ баланың бәхетен уйла!"

- Сабирҙың тәҡдименә мин риза, - тине Ғариф, ахырҙа. - Мөслимә еңгә, һинең изгелекле, донъяла иң ғәҙел кеше икәненә белмәй йөрөгәнем өсөн мине ғәфү ит. Ер йөҙөндә тик һинең кеүек кешеләр генә булһа, был донъя ниндәй гүзәл булыр ине, еңгә!

- Һиннеҙ нисек йәшәребеҙҙе күҙ алдына килтерә алмайым, ҡәйнәм, - тип Шәүрә Мөслимәне ҡосаҡлап алды. - МеҢ-мең рәхмәт һиңә, ҡәйнәм!

- Бәхетле генә булығыҙ инде, балаҡайҙар. - Яулыҡ осо менән битен ҡаплаған Мөслимә ирекһеҙҙән эркелеп сыҡҡан күҙ йәштәрен йәшерә алманы. Бер аҙ тынысланғас, күҙҙәрен һөрткөләп алды ла дауам итте: - Ошо көндән алып миңә "ҡәйнәм" тип өндәшмәһәң дә ярар ине лә ул, килен. Бөгөндән мин үҙеңә апһын булырмын, тип тә әйтергә булыр ине... Әммә...

Барыһы ла һораулы ҡараш менән Мөслимәгә баҡты.

- Әммә, - тип ҡабатланы Мөслимә, - һеҙҙең никахығыҙҙы хәләлләп ҡуйырға беҙ Аллаһы Тәғәлә алдында бурыслыбыҙ. Бына быныһы - тағы бер ҡатмарлы мәсьәлә... Йәғни, мулланан никах уҡытмай тороп, Аллаһы алдында һеҙҙе оло гонаһлы иткем килмәй. Никахһыҙ йәшәгән бәндәләр ғүмер буйы зина ҡылып йәшәгәндәрҙән һанала. Шуның өсөн дә, балаларым, теләһәк-теләмәһәк тә, был серҙе кемгәлер асырға мәжбүр буласаҡбыҙ. Бына ошо мулла мәсьәләһе мине бигерәк борсой, балалар... Ни уйларға ла, ни кәңәш итергә лә белмәйем...

- Тап ошо мәсьәләне хәл итерҙәй ышаныслы кеше беҙҙә бар, еңгә, - тип һүҙгә ҡушылды Ғариф.

Шәүрә менән Мөслимә өмөт менән Ғарифҡа баҡтылар.

- Эйе, ундай мулла бар, - тине Ғариф. - Уны барығыҙ ҙа бик яҡшы белә. Ул - Әхмәдулла ағай.

- Бәй, яҙ башында уҡ абыстайы менән ауылдан күсеп китте бит ул, - тине Мөслимә. - Икенсенән, муллалар барыһы ла берҙер инде...

- Улай тимә, еңгә, - тине Ғариф. Мин ул Әхмәдулла ағай менән һөйләшеп тә ултырғаным бар. Бик уҡымышлы кеше. Шәриғәт закуны буйынса, еңгә, һинең менән минең һәм Кәлимулла менән Шәүрәнең никахтары дөрөҫ булмай, тине ул миңә. Ул һинең менән миңә мәжбүри никах уҡыуҙан ҡырҡа баш тартҡан кеше... Тыуған ауылына - Фәйзуллаға күсенеп китергә йыйына ине ул, буғай....

* * *

Иртәгәһен иртүк Фәйзулла ауылына килеп еткән Ғарифтың йомошон тыңлап бөткәс, Әхмәдулла мулла һис икеләнеп, йә иһә ялындырып торманы.

- Бына был никахты, ҡустым, ысын күңелемдән уҡыясаҡмын иншаллаһ, - тине мулла юлға йыйына-йыйына. - Аллаһы Тәғәлә һис тә бәндәләренә ҡайғы-хәсрәттә йәшәрлек талаптар ҡуймаған. Бер-береңде яратып, хөрмәт итеп, күңелең тартҡан кешең менән ҡауышырға ҡушҡан. Тик, үкенескә ҡаршы, халҡыбыҙҙа борондан килгән, бәгзе ваҡытта хатта кешелекһеҙ булған йолаларҙы "шәриғәт шулай ҡуша", тип, наҙан кешеләрҙең баштарын бутаусылар күп. Уҡыу етешмәй шул беҙгә, кем, Ғариф ҡустым...

Иң тәүҙә Ғарифтан Мөслимәгә өс мәртәбә "талаҡ" әйттертеп, ә Кәлимулланың Шәүрәгә уныһын да әйтеүенең кәрәк түгеллеген төшөндөрөп бирҙе Әхмәдулла мулла. Барлыҡ шартына килтереп, Шәүрә менән Ғарифтың яңынан буйҙаҡ икәндәрен раҫлағандан һуң, икеһенең дә ризалығын һорап, мулла уларға никах уҡыны. Никах уҡылғас, Ғариф менән Шәүрә тулы хоҡуҡлы ир һәм ҡатын тиеп иғлан ителде. Йәш ғаилә ағзаларының һәр береһенең ғүмер буйы үтәргә тейешле булған төп бурыстары һаналды. Аллаһы Тәғәләнән йәштәргә бәхет һорап доға ҡылынды.

Шул көндө үк, кискә ҡарай Ғариф яратҡан туры айғырын егеп, мулланы ауылына илтеп ҡуйҙы. Юлда барғанда Әхмәдулла мулла уға нәсихәт һүҙҙәрен әйтте.

- Кем, Ғарифйән ҡусты, бая теге Шәүрә килен, Мөслимә еңгәләр алдында әйтергә ҡыйынһынған, әммә әйтмәй ҡалдырырға ярамаған бер һүҙем бар. Һеҙҙең үҙ-ара мөхәббәтегеҙ, бер-берегеҙҙе өҙөлөп һөйөүегеҙ саманан ашһа ла, икһеҙ-сикһеҙ булһа ла, Аллаһыны онотмағыҙ. Ул ғына ла түгел, барлыҡ донъяны, кешелекте яралтҡан Аллаһты һәм уның бәйғәмбәрен әҙәм балаһы үҙенән һәм үҙенең иң яҡын кешеләренән дә артыҡ яратырға тейеш. Бығаса ҡылған гонаһтарығыҙ өсөн Аллаһ сөбхәнә үә Тәғәләгә тәүбә итеп, иң һуңғы көндәрегеҙгәсә уға ғибәҙәт ҡылып йәшәргә тейешһегеҙ. Ихлас күңел менән доғалар ҡылһаң, Раббыбыҙ гонаһтарҙы ярлыҡай. Әгәр ҙә намаҙ уҡымай ғүмер итәһегеҙ икән, һеҙҙең һис эскерһеҙ булып тойолған һөйөү хистәрегеҙ оло гонаһ булып яҙылып, был донъяла һәм ахирәттә өҫтөгөҙгә төшөүе ихтимал. Ошо һүҙҙәремде, кем, Ғариф туғаным, Шәүрәңә лә һүҙмә-һүҙ еткер. Әйтер һүҙҙәрем бына шул. Аңлауымса, һеҙ бик алыҫ ерҙәргә күсеп китергә йыйынаһығыҙ. Башҡаса яҡты донъяла күрешә алмауыбыҙ ҙа мөмкин. Бәхил булығыҙ...

Кешелеклелеге, ғәҙеллеге, аҡылы менән тәрән ихтирамын яулап алған Әхмәдулла мулланың һүҙҙәрен, өгөтнәсихәтен Ғариф күңеленә һеңдереп ҡуйҙы. Аллаһ алдында үҙҙәренең бик тә оло гонаһлы икәнен таный ине ул. Әлбиттә, ул үҙе лә, Шәүрә лә, уларҙың буласаҡ балалары ла быуындан-быуынға хаҡ дин юлынан йөрөйәсәк, иншаллаһ...

Бер нисә көндән Ғариф менән Шәүрә барыһы менән бәхилләшеп, өйөрҙән иллеләгән баш йылҡы алып, таң менән Һаҡмар түбәненә ҡарай юлға сыҡты. Сабир уларҙы оҙатып китте. Уның алыҫ, күрмәгән-белмәгән яҡтарға барып йөрөп килеүе тураһындағы хыялы, ахырҙа, тормошҡа ашты.

Үҙ балаларындай итеп күргән ҡәйнеше менән киленен Мөслимә илай-илай оҙатып ҡалды. Башҡаса бер ҡасан да күрешә алмаясаҡтарын белә ине ул...

* * *

Шул ваҡиғаларҙан һуң бик күп йылдар үтеп китте. Ғариф менән Шәүрә юғалғанын кешеләр төрлөсә һөйләне. Икеһе лә һыуға батҡан, имеш, тине ҡайһылары. Ә бәгзе берәүҙәр (уҫалыраҡ кешеләр) уларҙы "Ер йотҡандыр", тинеләр. Үтә ныҡ ҡартайған Сәмиғулла бабай йылҡының кәмегәнен дә һиҙмәне. Ысынбарлыҡты белгәндәр серҙе ныҡ һаҡланы.

Бер ваҡыт Сабир инде үҫеп, ир ҡорона еткән улы Мөхәммәт менән утын ҡырҡырға Һаҡмар буйындағы ҡайынлыҡҡа килде. Унда бер-нисә таныш булмаған кеше урман ҡырҡып, утынды һал итеп йылға буйлатып ағыҙа ине. Һаҡмар түбәне яғынан, алыҫтан килгән ялан яҡ кешеләре булып сыҡты улар. Аттарын туғарып, туғайлыҡҡа тышап ебәргәс, тегеләр менән йәнәш Сабирҙар ҙа ағас ҡырҡырға тотондо.

Ялға туҡтағандарында, араларынан бер йәш егет, түмәр өҫтөндә ултырған килеш, моңло итеп йырлап ебәрҙе:

Билге лә генә ҡуйҙым, ай, биләнгә,
Шәүрә килен киләм дә тигәнгә.
Ҡәнәфер ҙә сәйнәп, бөрктөм баҙыян
Шәүрә килен кейгән дә еләнгә...

Сабир менән улы был йырҙы тын да алмай тыңланылар. Сабирҙың күҙҙәре йәшләнде. Бала саҡтан йырға-моңға ғашиҡ булып үҫкән Мөхәммәт тулҡынланып:

- Ниндәй иланы моңло, йөрәктәргә үтеп инерҙәй йыр, атай, - тине йырҙың тәьҫиренән һаман айный алмай. - Был - ялан яҡтарының йыры, буғай. Бығаса ишеткәнем юҡ ине...

- Эйе, - тине атаһы, - бик матур йыр, улым.

- Беҙҙең яҡта ошо йыр бик таралған. Халыҡ яратып йырлай, - тине йырсы егет. Ҡайны менән килене араһындағы эскерһеҙ һөйөү йырлана был йырҙа... Ҡарашын алыҫтарға төбәп, егет тағы ла йырын һүҙҙы:

Шәүрә килен, кейгән еләнеңдең
Итәк осҡайҙары суғы оҙон...
Көндөҙҙәрен йөҙөм, ай, ояла.
Һөйләшербеҙ, ҡайным, төн оҙон...

Сабирҙың күңелен шатлыҡлы тойғолар биләп алды. Бик оҙаҡ йылдар күрмәгән Ғариф менән Шәүрәнән сәләм алғандай булды. Был - уларҙың йыры! Ҡасандыр, кеше-маҙар ишетеп ҡалыуҙан шикләнеп, аулаҡта фәҡәт бер-береһенә генә йырлашҡан, күңел түренән сыҡҡан был йырҙарҙы башҡалар ҙа отоп алып йырлай! Уның дуҫтары - яҡшы кешеләр араһында! Тимәк, алыҫ ерҙәрҙә улар тамыр йәйеп, бәхетле ғүмер итә...

(Аҙағы).

✓ *Беҙҙең өләсәйҙәр ҙә динле булды, әммә килешле генә балитәкле күлдәк кейер, яулыҡтарын да килешле генә итеп ябынып йөрөр ине. Миндә лә үҙебеҙ булып ҡалайыҡ, тип әйтмәксемен...*

ИНТЕРНЕТТАН



ҺЫУЫТҠЫСТА... бактерия "һаҡламағыҙ"

■ Әсә булыу ҡатын-ҡыҙ организмын күп төрлө үҙгәрештәргә килтерә. Израиль ғалимдары асыҡлауынса, хатта баш мейеһенең ҡайһы бер функциялары өлөшләтә үҙгәрә икән. Иерусалим университеты хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, был үҙгәрештәр, шул иҫәптән, тауыш һәм еҫ тойоу менән бәйле булғандары ла әсә кешегә балаһы менән аралашырға һәм унан килгән ярҙам һорау сигналдарын яҡшыраҡ тойорға мөмкинлек бирә.

■ Кардиолог Клайд Янси белдереүенсә, һәр кеше йөҙ йәшкә тиклем йәшәй ала. Доктор иҫәпләүенсә, бының өсөн ете ҡағиҙәне тотоп йәшәү ҙә етә. Әүҙем тормош алып барған, холестеринды, ҡандағы шәкәр кимәлен һәм ҡан баҫымын контролдә тотҡан, дөрөҫ туҡланған, артыҡ ауырлыҡ менән яфаланмаған, тәмәке тартмаған кешеләр оҙон ғүмерле була. Шулай ҙа бының менән күп табиптар килешмәй, улар ғүмер оҙайлығы 50 процентҡа гендарҙан тора, тип белдерә.

■ Көнкүрештә киң ҡулланылған һабын, кер йыуыу порошогы, шулай уҡ шампунь, душ өсөн гелдәрҙең составында булған матдәләр сәләмәтлеккә зыян килтереүе лә ихтимал. Цитронеллол, линалоол, кумарин кеүек матдәләрҙе етештереүселәр һабынға һәм башҡа йыуыусы сараларға еҫ биреү өсөн ҡуллана. Мәҫәлән, рауза еҫе сығып торған шампунға - цитронеллол, ынйы сәскәһе еҫеһенә - линалоол, яңы сабылған бесән еҫеһенә кумарин өҫтәлә. Улар сәләмәтлеккә зыян килтермәһен өсөн, йыуыныу сараларын дөрөҫ ҡуллана белергә лә кәрәк, ти белгестәр. Ҡыҫҡа итеп әйткәндә, уларҙы тәндән тиҙ генә йыуып төшөрөү мөһим. Шуға ла химиктар еҫһеҙ йыуыу сараларын ғына ҡулланырға тәҡдим итә, сөнки сараның һөҙөмтәлелеге уның еҫенә бәйле түгел. Был бары тик һатып алыусыларҙы йәлеп итеүсе ысулдарҙың берәһе генә.

■ Быға тиклем интеллект кимәле, иң тәү сиратта, нәҫелгә бәйле төшөнсә, һуңынан ғына ул даими уҡыу һәм уйлау һөҙөмтәһе тип ҡабул ителә ине. Лондон университеты ғалимдарының һуңғы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, үҫмерлек осоронда IQ кимәле ыңғай яҡҡа ла, кире яҡҡа ла үҙгәреүе ихтимал. Ғалимдар фекеренсә, 14 йәштән 18 йәшкә тиклем даими шөғөлләнгәндә, үҫмерҙең мейеһе яҡшыраҡ үҫешә ала. Ә был осорҙо ел ҡыуып йөрөп уҙғарыусылар, киреһенсә, аҡыл үҫеше яғынан тиҫтерҙәренән күпкә артта ҡаласаҡ.

■ Бөгөнгө көндә һыуытҡыс етештереүселәр һатып алыусыларға был йорт техникаһының ниндәй генә төрөн тәҡдим итмәй. Бигерәк тә иретеү талап ителмәгән, no frost технологиялы һыуытҡыстар модала. Әммә Microban Europe компанияһы белгестәре үткәргән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә тап ошо төр һыуытҡыстарҙа ауыр сирҙәр тыуҙыра торған микроорганизмдарҙың күпләп туплануы асыҡланған. Бигерәк тә һыуытҡыстың йәшелсә-емеш өсөн тәғәйенләнгән йәшниктәре сәләмәтлек өсөн зыянлы булған эсәк таяҡсаһы, сальмонелла һәм листерия бактериялары сығанағы булып тора. Шуға ла һыуытҡысығыҙ ни тиклем ҡиммәтле һәм заманса модаға ярашлы булмаһын, уны йышыраҡ йыуып тороғоҙ, тип кәңәш итә белгестәр.

ФЕКЕР ҠОРО

Һуңғы йылдарҙа йәмғиәтебеҙҙә ислам динен ҡабул итеп, шәриғәт ҡанундарына ярашлы кейенгән ҡыҙҙарҙы йыш осратырға мөмкин. Шулай уҡ һижәб кейгән ҡыҙҙарҙың эшкә урынлашҡанда йә уҡыған урында төрлө аңлашылмаусанлыҡтар менән осрашыуы ла билдәле. "Мәктәп директорына мосолманса кейенеү оҡшамай, яулығыңды һалмаһаң, эштән китергә тура килер, тип янай", - тигән шылтыратыуҙар ҙа булғыланы ҡайһы бер райондарҙан. Ысынлап та, йәмғиәтебеҙ бөгөн мосолман кейемендәге ҡыҙ-ҡатындарҙы ҡабул итергә әҙер түгел. Шул уҡ ваҡытта һижәбте тыйған йәки яҡлаған закон да юҡ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге Ҡатын-ҡыҙҙар, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссия үткәргән "Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарының кейеме тураһында" тип аталған ҡорҙа ошо турала фәһемле генә һөйләшеү уҙҙы. Гәзит уҡыусыларға ошо ҡорҙа яңғыраған фекерҙәрҙе тәҡдим итәбеҙ.

БАШТА ИМАНДЫ КҮҢЕЛЕҢӘ ИНДЕР,

шунан иһә яулыҡ ябынырһың...

Сәғит ИСМӘҒИЛЕВ, эшҡыуар: Аллаһҡа иман килтергән кеше аҙымлап алға бара, иманы нығынған һайын ул Аллаһы Тәғәләнең бойороҡтарын да еренә еткереп үтәй. Беҙ бер нисек тә Ҡөрьәндә яҙылғанды үҙгәртеп, Бәйғәмбәребеҙ ҡушҡанды үтәмәйенсә булдыра алмайбыҙ. Исламдың һулы ла, уңы ла юҡ, ислам тик бер генә, шулай булғас, беҙ уның ҡанундарын тулыһынса ҡабул итергә тейешбеҙ. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, дингә килгәс, ундағы кейенеү рәүешен ҡабул итергә бурыслы. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ исламда ҙур урын биләй. Дин тарихына күҙ һалһаҡ, Бәйғәмбәребеҙҙән иң беренсе ислам ҡабул итеүсе лә, ислам юлында беренсе шаһит та ҡатын кеше булған. Мин ҡәтғи рәүештә ҡатын-ҡыҙ дин ҡабул иткәс тә, мотлаҡ яулыҡ ябынырға тейеш, тимәйем, сөнки һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, бөтәһе лә яйлап, аҙым-аҙымлап барырға тейеш. Бындай аҙымды яһар алдынан һәр кемдең Аллаһы Тәғәләгә иманы, етерлек ғилеме, үҙ-үҙенә ышынысы булырға тейеш. Үҙем ислам динен 14 йыл өйрәнәм, шулай ҙа был өлкәлә әле һаман бер нәмә лә белмәгәнемде аңлайым. Көн һайын ғилемемде камиллаштырыу йәһәтенән динебеҙҙе өйрәнеүҙе дауам итәм. Ә яулыҡ мәсьәләһенә килгәндә, беҙ был йәһәттән бер ниндәй ҙә ҡарар ҡабул итергә тейеш түгелбеҙ, бары тик мосолман ҡыҙҙарын яҡлай ғына алабыҙ. Ә инде яҡларлыҡ мөмкинлегебеҙ булмаһа, уларҙы яулыҡ ябыныуҙан тыйырға хоҡуғыбыҙ юҡ. Әгәр тыйбыҙ икән, был көфөрлөк, ҙур гонаһ булыр.

Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА, медицина фәндәре докторы, профессор: Шундай бер хикәйәт бар. Бер дин әһеленән: "Бөгөнгө тормошта динебеҙ ҡушҡанса йәшәүе ауыр, йәштәрҙе нисек тәрбиәләү яҡшыраҡ булыр? Уртаҡ фекергә килеп, ҡайһы бер дин әмерҙәрен үҙгәртеп булмаҫмы?" - тип һорағандар. "Һәр дәүерҙең ниндәйҙәр үҙенсәлектәре, ауырлыҡтары булыр. Әгәр уртаҡ юл табабыҙ, тип динебеҙҙе һәр ваҡыт үҙгәртеп торһаҡ, ул диндән ни ҡалыр?" - тип яуап биргән теге дин әһеле. Сәғит хажи әйткәнсә, ысынлап та, һәр ваҡыт үҙгәрештәр индерһәк, дин - дин булып ҡалмаҫ. Дин ҙур бер тәғлимәт, Аллаһы Тәғәләнең һүҙе икән, беҙ уға эйәрергә тейешбеҙ. Шулай ҙа бөгөн күп ҡатын-ҡыҙ эшләргә, аҡса табырға, үҙ йүнен үҙе күрергә мәжбүр. Минең йәшемдә эш урынында яулыҡ ябынып йөрөһәм дә, миңә бер кем бәйләнә алмаҫ. Ә быны яулыҡ ябынған йәшерәк ҡыҙҙарҙан һәм ҡатындарҙан ишетеүемсә, был йәһәттән улар бер аҙ ҡаршылыҡтарға осрай. Әгәр мосолман ҡыҙына етәксеһе эш урынында яулыҡта йөрөргә рөхсәт итмәй икән, бәлки, Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенеп, нисектер эшләргә, йәшәргә тырышырға кәрәктер? Иң мөһиме, күңелдең паклығы, ниәттең изгелеге түгелме һуң? Бер ваҡыт Башҡортостанға Ҡөрьәнде тәржемә иткән ханым Валерия Порохова килгәйне. Осрашыуҙа ул: "Ислам тигән һүҙҙә ҙур мәғәнә ята, ундағы фәлсәфәне аңлап бөтөп булмай. Ә ябай ғына итеп әйткәндә, ислам ул - күңелдең, уйҙарҙың, ниәттәрҙең, ғәмәлдәрҙең таҙалығы", - тине. Етмеш йылдан артыҡ атеизмда тәрбиәләнгән халыҡты ҡапыл ғына үҙгәртеп тә булмайҙыр. Шул уҡ ваҡытта етәкселәрҙе лә тәнҡитләй алмайбыҙ. Рәсәй күп милләтле һәм күп конфессиялы ил тип аталһа ла, беҙҙә дәүләт тарафынан диндәр яҡлау тапҡаны юҡ. Бөгөн мосолмандарҙан ғәйеп эҙләп, уларға ниндәй ҙә булһа нахаҡ тағырға ғына торалар. Бәлки, Рәсәй дәүләте тарафынан етәкселәргә, эш урынында ҡыҙҙарға яулыҡ ябынып йөрөүҙе тыйығыҙ, тигән күрһәтмә бирелмәйҙер, ләкин бөгөн һәр кем үҙ эш урыны өсөн ҡурҡа, үҙенә һүҙ теймәһен өсөн алданыраҡ ҡарар ҡабул итеп ҡуя. Ә быны Рәсәй дәүләте етәкселәре христиан байрамдары ваҡытында сиркәүгә бара, иң алғы сафҡа баҫып суҡына. Улар үҙҙәренең был ҡылығы менән ошо диндә булыуҙарын һәм уны яҡлаясағын аңғарта. Ә милли республика етәкселәренең мәсеттәргә барып намаҙ уҡығанын быға тиклем күргәнебеҙ юҡ әле. Тимәк, уларҙың был динде яҡлап сығыуы ла икеле.

Гөлфиә ЯНБАЕВА, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире: Валерия Порохова Башҡортостанға 90-сы йылдар башында килгәйне, уның менән осрашыуҙа миңә лә ҡатнашырға насип булды. Әлбиттә, беҙ уға мосолман ҡатын-ҡыҙҙарының һижәбе тураһында ла һорау биргәйнек. Валерия Порохованованың әйткәндәрен хәтерләйем: "Һеҙ гәрәп ҡатын-ҡыҙҙарының пәрәнжә кеүек кейемдәрен туранан-тура үҙегеҙгә күсермәгеҙ, - тигәйне ул. - Ул илдәрҙәге кейем тәбиғәт шарттарынан сығып, йәғни ҡояштан, йыш булып торған ҡом бурандарынан ышыҡланыу өсөн яраҡлаштырылған. Рәсәйҙә бит тәбиғәт шарттары бөтөнләй икенсе, яулыҡ менән бөркәнеп, йөҙөндө ҡаплап йөрөү мотлаҡ түгел. Бына минеке кеүек баш кейеме тегеп алһағыҙ, бик еткән". Валерия Порохова алғы яҡтан матур итеп сигелгән шапкаға оҡшаш баш кейеме кейеп алғайны. Тимәк, мосолман кейемен барыбер ҙә үҙебеҙҙең шарттарға, хатта үҙебеҙҙең милли стилгә яраҡлаштырыу кәрәк. Юҡһа, беҙҙең урамдарҙа пәрәнжә кейгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күренгеләй, күпселек ҡатын-ҡыҙҙар Төркиәнән йә башҡа мосолман илдәренән ҡайтарылған тоҡ һымаҡ күлдәктәрҙә йөрөй. Улар шунда уҡ әйләнә-тирәләгеләрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итә. Беҙҙең өләсәйҙәр ҙә динле булды, әммә килешле генә балитәкле күлдәк кейер, яулыҡтарын да килешле генә итеп ябынып йөрөр ине. Миндә лә үҙебеҙ булып ҡалайыҡ, тип әйтмәксемен...

Римма СӨЛӘЙМӘНОВА, Башҡорт дәүләт медицина университеты доценты, медицина фәндәре кандидаты: Быға тиклем Ҡырғыҙстанда йәшәнем, ҡайтыуыма быйыл дүрт йыл тула. Бөтә дин гәмәлдәрен үтәйем, тик быны Өфөгә ҡайтҡас, миңә яулығымды сисергә ҡуштылар. Ислам ҡанундарын яҡшы белгәнгә, бының ҙур гонаһ икәнлеген аңлаһам да, тыңларға тура килде, сөнки миңә бөгөн нисектер аҡса табырға, өс баланы тәрбиәләргә кәрәк. Башҡа дин гәмәлдәрен үтәүҙән туҡтамайым: намаҙҙарҙы ваҡытында уҡыйым, йыл һайын ураҙа тотам. Аллаһы Тәғәләнән көн дә, яулыҡ ябынырға мөмкинлек бирһәң ине, тип һорайым. Минеңсә, һәр ҡатын-ҡыҙҙың бындай теләге барҙыр, сөнки оҙон итәк, яулыҡ ҡатын-ҡыҙҙы күркәмләтә, уға нәзәкәтлек өҫтәй. Иншаллаһ, ваҡыты еткәс, һәр беребеҙгә динебеҙ ҡушҡанса кейенергә насип булыр.

Морат ЛОҠМАНОВ, тележурналист: Бер бик аҡыллы кеше йәшәгән. Бер ваҡыт уның янына зинасы, боҙоҡ ҡа-

тын килгән дә: "Һин шул ҡәҙәре аҡыллы һөйләйһең, ләкин артыңдан эйәреүселәр күп түгел, ә бына мин бер ҙә аҡыллы һүҙ әйтмәйем, зина ҡылам, фәхишәмен, шулай ҙа артымдан ярты ҡала эйәрә. Быны нисек аңлатырһың?" - тигән. Аҡыл эйәһе уға: "Мин бит тауға менеп барам, халыҡты ла юғарыға этәрәм. Тауға менер өсөн көс һалырға кәрәк, ә түбән тәгәрәр өсөн бер ниндәй ҙә көс кәрәкмәй, үҙеңдән-үҙең тәгәрәйһең", - тип яуап биргән. Яулыҡ ябынып йөрөү, бәлки, ауырҙыр ул, ләкин бөгөнгө ҡорҙа ошо турала һөйләшеү башлау - үҙе үк яҡшы күренеш. Башта нимәлер тураһында уйлана башларға кәрәк. Күбебеҙ донъяның яралтыусыһы барлығына, Аллаһтың берлегенә ышана. Ә бына ышаныу ғына етә микән? Аллаһы Тәғәләнең кешеләр өсөн ебәргән тәғәйен күрһәтмәләре бар. Уларҙы һәр беребеҙ өйрәнергә, аңларға, ҡабул итергә тейешбеҙ. Ҡатын-ҡыҙҙарға ғәүрәттәрен ҡаплап йөрөү йәһәтенән дә динебеҙҙә айырым талаптар бар. Был турала Ҡөрьәндә лә яҙылған, ләкин был аят өлөшлөтә өс тапҡыр төшөрөлгән. Унда иң тәүҙә тик Бәйғәмбәрҙең ҡатындарына, ә инде бер аҙ ваҡыт үткәс, башҡа мөьмин ҡатындарға ла ғәүрәттәрен ҡапларға әмер ителә. Бында ла бер хикмәт барҙыр. Әгәр кемдендер иман тураһында мәғлүмәте бар икән, ул динде үҙгәртеү тураһында һүҙ ҙә алып бармаясаҡ. Бында беҙҙең мәҡсатыбыҙ икенсе. Халыҡ дингә үҙенән-үҙе килер тигән һүҙ дөрөҫ түгел, әгәр кеше хәрәкәт итмәһә, сәбәп ҡылмаһа, үҙенән-үҙе халыҡ түбән тәгәрәйәсәк. Диндең яҡшы икәнлегенә бер кем дә ҡаршы килмәй. Ә бына бөгөнгө юлдар дөрөҫмө, юҡмы, беҙ шул турала уйланырға тейешбеҙ.

Гөлфиә ЯНБАЕВА, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире: Беҙ дин тәғлимәтен белмәйбеҙ, уны өйрәнәһе лә өйрәнәһе. Хәтеремдә ҡалған бер хикәйәт тураһында һөйләп уҙғым килә. Бер ауылға мулла килә. Ауылда матур мәсет бар, ләкин унда халыҡ йөрөмәй. Мулла ауыл буйлап йөрөп, халыҡты мәсеткә йөрөргә өгөтләй. "Унда йөрөр өсөн тәһәрәт алырға кәрәк бит", - тигән һылтау таба ауыл халҡы. Мулла аптыраған-дың көнөнән: "Ярай, улайһа, тәһәрәтһеҙ йөрөгөҙ", - ти. Бөтә ауыл халҡы мәсеткә тәһәрәтһеҙ йөрөй башлай. Бер саҡ был муллаға ауылдан күсеп китергә тура килә, уның урынына икенсеһе килә һәм күп тә үтмәй, яңы мулла элекеһенә килеп дәғүә белдерә: "Һин бөтә ауыл мәсеткә йөрөй, тинең, ә улар бит хатта тәһәрәт тә ала белмәй!" "Мин уларҙы мәсеткә йөрөргә өйрәттем, ә һин хәҙер уларҙы тәһәрәт алырға өйрәт", - тип яуап бирә уға элекке мулла. Минеңсә, төрлө шарттарға ҡарап, ҡайһы бер урындарҙа иманыңа зәғифлек килтермәйенсә, ниндәйҙер ташламаларға барыу ғәйеп түгелдер...

Морат ЛОҠМАНОВ, тележурналист: Ислам ҡанундарына килгәндә, ысынлап та, мотлаҡ Мәккә һәм Мәҙинә ҡалаһы өсөн генә тәғәйенләнгән шәриғәт ҡанундары бар. Беҙҙә лә уларҙы ҡабул итеү ғилемһеҙлектән килә. Шулай уҡ милли йолаларҙы боҙмай, ғөрөфғәҙәттәрҙе һаҡлап йәшәргә була, ләкин шуныһын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк: Аллаһы Тәғәлә шул тиклем ғәҙел, әгәр халыҡ милли ҡиммәттәрен генә алға ҡуйып, динде һанға һуҡмаһа, ул был халыҡты юҡҡа сығара ла ҡуя, ә дин ҡанундарын иҫтә тотоп, һәр ваҡыт иман менән эш итһә, ул шул милләтте күтәрә. Тарихтан быға күп миҫалдар килтерергә була.

Ассият ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, врач: Медицина өлкәһендә дин ҡабул итеп, яулыҡ ябынған ҡыҙҙар менән бер ниндәй ҙә проблемалар булғаны юҡ, сөнки талаптар буйынса дауаханала былай ҙа баш ҡапланған булырға тейеш. Бөгөн ҡайһы бер эш урындарында дресс-код, йәғни кейенеү ҡағиҙәләре бар. Был осраҡта, әлбиттә, яулыҡлы ҡыҙға эшкә урынлашҡанда ҡаршылыҡтарға осрарға тура килә. Ике-өс юғары уҡыу йортон тамамлап та, алған һөнәре буйынса эшкә урынлаша алмаған мосолман ҡыҙҙары ла бар Өфөлә.

Зөлфиә ХАННАНОВА, шағирә: Урамда йәберләмәһәләр ҙә, һине өйҙә йәберләүселәр ҙә булыуы мөмкин бит әле. Хәҙрәттәрҙең ҡатындары бәхетле, улар дин ғәмәлдәрен ирҙәренә эйәреп үтәй. Ләкин шундай миҫалдар ҙа бар: күп ирҙәр ҡатынының намаҙ уҡығанын, мәсеттәргә йөрөгәнен үҙ итмәй. Әгәр ошондай ҡаршылыҡтар булмаһа, беҙ рәхәтләнеп яулыҡта йөрөр инек. Шулай ҙа бындай ғына ҡаршылыҡтарға ҡарап, йәш ҡыҙҙар дингә бөтөнләй килмәй, ситләшеп ҡуймаһын ине. Яулыҡ беренсе шарт түгел, ислам ғилемен үҙләштерһендәр, доғалар өйрәнһендәр, намаҙға баҫһындар. Беҙ, мәҫәлән, һижәбтә йөрөмәһәк тә эргә-тирәләге кешеләребеҙгә дин тураһында һөйләйбеҙ, аңлатабыҙ. Хатта беҙ һүҙ башламаһаҡ та, улар үҙҙәре килеп ҡыҙыҡһына, һораша. Шуға күрә, иншаллаһ, динебеҙ илебеҙҙә ныҡлап урынлашһа, Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙең йөрөгән аҫһа, беҙ тулыһынса дин ҡанундары буйынса йәшәй башларбыҙ, тип өмөтләнәм.

Фәнзил ӘХМӘТШИН, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары: Дин ул Аллаһы Тәғәлә тарафынан беҙгә һынау булараҡ ебәрелгән. Кеше бер һынауһыҙ ғына ожмахҡа инергә теләй. Әлбиттә, һижәб тә ҡатын-ҡыҙ өсөн бирелгән һынауҙыр. Әгәр кеше Аллаһҡа ышанмай, уны яратмай икән, ул уның әмерҙәрен дә үтәй алмаясаҡ. Һижәб мәсьәләһендә лә шулай уҡ. Иң башта йөрәктә Аллаһы Тәғәләне урынлаштырырға, унан һуң Ул әйткәнде үтәйем, тип яулыҡ ябынырға кәрәк. Ир-ат тураһында һүҙ алып барғанда, ысынлап та, уларҙың күптәре бөгөн үҙҙәре намаҙға баҫып өлгөрөрөлгөрмәҫтән, ҡатындарынан яулыҡ ябыныуҙы талап итә, ҡаты ҡылана башлай. Бәйғәмбәребеҙ: "Йомшаҡлыҡ менән мөгәмәлә итегеҙ", - тигән. Беҙ шул йомшаҡлыҡты онотоп ебәрәбеҙ. Бөгөнгө көндә ҡыҙҙарға дингә килеүе ысынлап та ҡыйын, шуға күрә уларға миһырбанлы һәм йомшаҡ булырға кәрәк. Әммә яулыҡ ябыныуҙың мотлаҡ шарт икәнен бөтәбеҙ ҙә аңларға тейеш, был һатыулаша торған нәмә түгел.

(Дауамы 15-се биттә).

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ

Сағылыш ҡануны

Йыһанға нимә ебәрәһегеҙ, шул урап ҡайта. Икенсе төрлө әйткәндә, беҙҙе ҡыйырһыталар икән, тимәк, элек үҙебеҙ кемделер ҡыйырһытҡанбыҙ, әгәр кәмһетһәләр - тимәк, элек үҙебеҙ кәмһеткәнбеҙ. Был тормошта булмаһа, үткән тормошта.

Кеше мөхиткә оҙатҡан теләһә ниндәй кире мәғлүмәт, кеше үҙенең проблемалары һәм бәхетһеҙлеге сәбәбен аңлап төҙәлмәһә, кире ҡайтып тик торасаҡ. Шулай итеп, һәр кем үҙен-үҙе тәрбиәләй. Аллаһ ғәҙел - бик гармониялы һәм ғәҙел ҡанун.

Тимәк, донъяны нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәк.

Кемделер тәрбиәләргә тырышмағыҙ, һәр кем үҙ һабағын үҙе ала.

Һәр кем был тормошҡа нимә ебәргән - ғәмәле менәнме, эше менәнме - мөһим түгел - шуны ала. Йәғни беҙ башҡаларға ниндәй мөнәсәбәттә булғанбыҙ, үҙебеҙгә лә башҡалар шундай уҡ мөнәсәбәттә. Һеҙҙең яфаларығыҙҙа бер кем дә ғәйепле түгел.

Ҡайһы берәүҙәр, бер ҡасан да бер кемде лә рәнйетмәнем, берәүгә лә насарлыҡ теләмәнем, әммә ни өсөн үҙем яфаланам, тип аптырай. Шул уҡ ваҡытта улар көн һайын телевизор ҡарай һәм яратҡан геройын ҡыйырһытҡанда, уйҙарынан ғына бөтөн дошмандарҙы юҡ итәләр. Йәғни был тормошта ниндәйҙер хәл-ваҡиға булып әйләнеп ҡайтҡан нәмәләргә яуызлыҡ орлоғо һалалар. Нескә план өсөн ысынбарлыҡтағы кешегәме, ниндәйҙер персонажғамы насарлыҡ теләйһең - айырма юҡ.

Хәҙер ваҡиғаларҙың бер-береһенә мөнәсәбәтен беләһегеҙ һәм уның киләсәктә үҙегеҙгә нисек әйләнеп ҡайтыуын баһалай алаһығыҙ.

Яҙмышты яҡшыртып буламы? Әлбиттә, мөмкин! Бының өсөн:

- яуызлыҡ тыуҙырыуҙы туҡтатырға;
- элек булдырған кире нәмәләрҙе ыңғайға үҙгәртергә (мөхәббәт менән тултырырға);
- тыныслыҡта һәм татыулыҡта йәшәргә кәрәк!

Уйҙарыбыҙ менән ысынбарлыҡты беҙ үҙебеҙ тыуҙырабыҙ. Кемдер, тирә-яҡта барыһы ла яуыздар, тип уйлай икән, уның өсөн был ысынбарлыҡ һәм ул ҡурҡып йәшәй.

Икенсе берәү тирә-яҡтағыларын изге тип уйлай һәм үҙенә шундай уҡ изге ысынбарлыҡ тыуҙыра һәм гармонияла йәшәй. Һәр кем үҙе тыуҙырған ысынбарлыҡҡа эйә. Ә беҙ көнө буйы уйлайбыҙ, тимәк, көнө буйы ысынбарлыҡ тыуҙырабыҙ. Нимә тураһында уйлағаныҡыҙҙы баһалағыҙ. Әгәр ыңғай фекерҙәр килә икән, тимәк, позитив тыуҙыраһығыҙ, һәм - киреһенсә.

Йәғни, карма - ул беҙҙең уйҙарыбыҙ, тиергә мөмкин. Уйҙарығыҙҙы үҙгәртегеҙ - кармағыҙ йәки яҙмышығыҙ үҙгәрер. Беҙ үҙ яҙмышыбыҙға үҙебеҙ хужа!

Рауфан МОРТАЗИН.
(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН

БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

Илаһ телендә һөйләш

Аҡыллы кешеләр кем уңыш ҡаҙана, шуларҙың стилен күҙәтергә, уларға оҡшарға тырышырға ҡуша. Бер ваҡыт танышымдан ни өсөн уның һәр ваҡыт ҡаштарын һыйпауының сәбәбен һорағас, ул миллионер күршеһенең даими рәүештә ҡашын һыйпауы тураһында әйтте. Ләкин ҡаш һыйпап ҡына байып булмағанын аңлағыҙ. Бындай ҡараш Илаһты һоҡландыра алмай, был уның теле түгел.

Илаһ теле һүҙҙәргә генә түгел, ғәҙәттәргә нигеҙләнгән. Әммә был һеҙгә эшләргә этәргес биргән һүҙҙәр ҡулланыуға ҡамасауламай. Һүҙҙәр ижадҡа ҡағылғанда, кире күҙаллауҙарҙы юҡҡа сығарыуы мөмкин. Бәлки, шул рәүешле бер ваҡытта ла үҙегеҙҙең ижад менән шөғөлләнгәнегеҙҙе аңламаҫһығыҙ ҙа.

Элис официантка була. Уның шул тиклем Илаһҡа хеҙмәт иткеһе килә, әммә бының урынына уға клиенттарҙы хеҙмәтләндерергә тура килә. Ул үҙе теләп буш ваҡытында сиркәүҙә эшләргә ҡарар итә. Унда уға кәңәшмәләр ваҡытында кофе килтерергә, ял көндәрендә хәйерселәргә аш таратырға ҡушалар. Шул ваҡытта ғына ул хатта ресторанда хеҙмәтләндереүҙең дә үҙенә күрә рухи аспекты булыуын аңлай. Эше уға ныҡыраҡ оҡшай, ҡәнәғәтлек, бер үк ваҡытта килем дә килтерә башлай.

Ижади әүҙемлеккә башҡа инаныуҙар ҙа, мәҫәлән, хыяллана белмәйһегеҙ һәм эш һөҙөмтәгеҙ бер ниндәй ҙә әһәмиәткә эйә түгел, тигән ҡарашҡа ышаныу ҙа ҡамасаулауы мөмкин. Бындай ҡараштарҙың сәбәбе ниндәй генә булмаһын, уларҙы бер үк һүҙҙәр менән юҡҡа сығарырға мөмкин. Бына Илаһ өсөн ысын әһәмиәтте раҫлаусы аффирмация:

Мин ижад итә беләм, сөнки ижади һәләтем бар.

Мин нимә кәрәк, шуны ижад итәм, ә минең ижад емештәре дөйөм ҡиммәткә эйә.

Әгәр был һүҙҙәр файҙа килтергәнен тойһағыҙ, уларҙы тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырып, көнөнә өс тапҡыр аҙна дауамында ҡабатлағыҙ. Көн һайын Илаһтың эргәгеҙҙә булыуын асығыраҡ тоя башларһығыҙ. Был билдәләр яҡшы яҡҡа ҙур үҙгәрештәр вәғәҙә итә.

Дөйөм хаҡ өлөштәр хаҡынан ҡиммәтерәк. Кеше үҙ юлы менән барырға күнеккән. Матди байлыҡҡа ынтылып, улар йыш ҡына мәйеттәр өҫтөнән атлай, Ерҙең тәбиғи байлыҡтарына ла иғтибар итмәй. Был тәбиғи экологияның, мөхиттең боҙолоуына килтерә. Һөҙөмтәлә фекерләү үҙгәрә, ситләшеү, төркөмдәргә бүленеү һәм һуғыштар башлана.

Әммә хәҙер барыһы ла үҙгәрә һәм был бик ваҡытлы.

Материалдарҙы ҡайтанан эшкәртеү, барлыҡ тереклекте һаҡлау идеяһы Ер-Әсәгә ҡарата ихтирамдың артыуы, кешенең тәбиғәт менән бер бөтөн булыуын аңлауға килтерҙе һәм ошо йүнәлештәге хәрәкәттәр әүҙемләште. Кеше аң, тән һәм йән кеүек ҡабул ителгән альтернатив медицинаның булыуын да аңланы. Дауалаусылар тәндең айырым ағзаларын ғына түгел, ә беҙҙе аң-тән-йән берҙәмлеге итеп ҡарай. Беҙ бөтөн, ә дөйөмдөң хаҡы айырым ағзалар хаҡынан ҡиммәтерәк. Был, ысынлап та, шулай. Бер өлөш үҙенең сикле аңына ғына эйә, ә бөтөнгә Илаһтың ҡатнашлығы һәм сикһеҙлек хас.

Роберт СТОУН.



